ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 октябрь (карасай) 2015

№42 (668)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көнсығышты өйрәнеүселәр...**

башҡорт улын ололаны



5,7

**Нурсиләнең ҡыҙыҡһыныуы -**

мәңгелек боҙҙар иле



6

**Тарихыңды таныт, башҡорт-ҡала!**



Тағы бер тапҡыр Нияз Мәжитовтың дәлилдәре, иҫбатлауҙары тураһында

8-9

**Көсөң етмәҫтәйҙе...**

Хоҙайға тапшыр, тиҙәр



10

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 15 октябрҙән 25 октябргә тиклем матбуғат баҫмаларына яҙылыу ун көнлөгөндә Башҡортостандың бөтөн почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө"гә 469 һум 02 тингә (махсус индекс В0665) яҙыла алаһағыҙ. Гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер "Военная история башкир", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", башҡортса "Дини календарь" китаптарына лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Календарҙа 17 октябрь Халыҡ-ара фәҡирлекте бөтөрөү өсөн көрәш көнө тип билдәләнгән. Фәҡирлек менән кем көрәшә, нисек көрәшә ала, тиғәнерәк уйҙар борсомаймы һеҙҙе?

***Рөстәм FYMӘРОВ, бюджет өлкәһе хеҙмәткәре:*** Был бик мөһим һәм бөтә донъя йәмәғәтселеген борсоуға һалған ҙур мәсьәлә. Фәҡирлек менән һәр заманда ла көрәшкәндәр, уны юҡҡа сығарыу өсөн төрлө юлдар эҙләгәндәр, бихисап ысулдар ҡулланғандар, ләкин әле булһа проблема хәл ителмәгән. Әгәр ҙә фәҡирлектә, ярлылыҡта йәшәүселәрҙән ни сәбәпле ошондай тормошта йәшәүҙәрен һорағанда, иманым камил, күпселек әҙ эш хаҡына һәм пенсияға, эш урындарының булмауына, аҙыҡ-түлектең ҡыйбат икәнлегенә баҫым яһаясаҡ. Шулай уҡ хөкүмәт эшмәкәрлегенә ҡарата ла асыулы шелтәләр яңғыраясаҡ. Әлбиттә, был факторҙар халыҡтың йәшәйешенә, уның финанс хәленә тәьҫир итә, ләкин уларҙы үҙгәртеү өсөн беҙ үҙебеҙ бер нисек тә йоғонто яһай алмайбыҙ. Магазиндағы аҙыҡ-түлеккә хаҡ ҡуя алмайбыҙ, эш хаҡының үҫеүенә тәьҫир итә алмайбыҙ - былар ябай халыҡтың компетенцияһында түгел.

Минә ҡалһа, ярлы булыуыбыҙҙың мөһим сәбәптәренең береһе - беҙҙең финанс йәһәттән мәғлүмәтһеҙлектә. Беҙ, дөрөҫөн әйткәндә, аҡса менән эш итә белмәйбеҙ, уны дөрөҫ ҡулланмайбыҙ. Шулай уҡ бөгөнгө көндә бер юғары уҡыу йортонда ла шәхси финанстар менән эш итеү тураһында белем бирмәйҙәр. Ни өсөн? Сөнки дәүләткә финанс яҡтан белемһеҙ кешеләр менән идара итеү күпкә еңел. Бындай халыҡ аҡсаға ныҡ бәйләнгән, улар уға бойһонған. Ата-әсәйҙәр ҙә, үҙҙәре финанс мәғлүмәткә эйә булмау сәбәпле, балаларына ошо йәһәттән дөрөҫ тәрбиә бирә алмай. Бала саҡтан беҙҙең мейегә "Күп эшләргә, тырышырға кәрәк, шул саҡта ғына етеш тормошта йәшәргә мөмкинһең", тигән принципты һалалар һәм кеше ғүмере буйы ошо ҡалыптан сыға алмай. Һөҙөмтәлә күптәр ауырыу, хәлһеҙ булып аҙ ғына күләмдәге пенсия менән хаҡлы ялға сығып китә. Ҡайһы берәүҙәр өс урында эшләп тә, күршеләренән, туғандарынан "эш хаҡына тиклем" тип аҡса һорап йөрөй. Уйлап ҡараһаң, уларҙың аҡсаһы күп һәм донъялары етеш булырға тейеш. Ләкин ысынбарлыҡ бөтөнләй икенсе, сөнки улар килем менән сығымдарының нисбәтен таба алмай. Мәҫәлән, нисек итеп 20 мең һум эш хаҡы менән 30-40 мең һумлыҡ кеҫә телефоны йөрөтөргә мөмкин? Нисек итеп кеҫәндә 500 һум ғына аҡса була тороп, магазиндан кредитҡа йәки бүлеп түләү шарты менән 35 мең һумлыҡ телевизор алып ҡайтырға була? Ни өсөн ата-әсәләр, әлеге лә баяғы кредитҡа батып, студент улына еңел машина алып бирә? Ошондай һәм башҡа миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Улар үҙҙәрен кемдәр рәтенә индерәләр, мин иһә уларҙы нәҡ ярлылар сафына баҫтырам. Тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап, көндө көнгә ялғап, һәр ваҡыт ҡайҙан аҡса табыу тураһында ғына уйлап, һөмһөрө ҡойолоп йөрөй бындай "байҙар".

Шәхсән үҙем сығымдарымдың килемемдән артыҡ булмауын һәр саҡ ҡаты контролдә тотам. Ҡыйбатлы сит ил машинаһында йөрөмәһәм дә, ял һайын ғаиләм менән кинотеатрҙар тупһаһын тапамаһам да, сит илдә булмаһам да, ябай телефондан аралашһам да күңелем китек түгел, сөнки мин бер ҡасан да бурысҡа аҡса һорап йөрөмәйем. Булғанына шөкөр итеп, ғаиләбеҙгә килгән килемде һаҡсыл тотоноп йәшәйбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# УЛАР ҘА ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ

**Өфөнөң Еңеү паркында тыл эшсәндәренә һәйкәл асылыуы тураһында хәбәр иткәйнек инде. 2013 йылда Һуғыш, хеҙмәт, Ҡораллы Көстәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандарының республика йәмәғәт ойошмаһы Башҡортостан Хөкүмәтенә тыл эшсәндәренә һәйкәл ҡуйыу тураһында тәҡдим менән мөрәжәғәт итте. Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы һәйкәлдең иң яҡшы проектына конкурс ойоштorҙо. Уның йомғаҡтары буйынса скульптор, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Андрей Ковальчуктың проекты иң яҡшыһы тип танылды.**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫН...
## рухи аҙыҡ менән тултырайыҡ

**Сәрүәр СУРИНА, журналист:** Йәшәү өсөн кешегә туҡланыу кәрәк. Донъяла өс туҡланыу төрө бар, тиҙәр. Ул да булһа, кеше һауа, һыу, рух менән туҡланып йәшәй ала. Һауа - нур менән туҡланыуҙы, бер ниндәй ризыҡ ашамай йәшәй алыуҙы аңлата. Һауа менән туҡланыу ысулын Тибет монахтары яҡшы үҙләштергән, улар медитацияға инеп, бик оҙаҡ ашамай тора ала. Һыу менән туҡланыу тигәне ҡәҙимге аҙыҡ-түлек ашауҙы аңлата. Рухи аҙыҡ кешеләрҙең күңел бушлығын тулыландыра. Башҡорт халҡына шул рухи аҙыҡ менән туҡланыу зарур, күңел бушлығын хис-тойғолар, милләтебеҙҙең боронҙан килгән йолалары, мәҙәниәте, ауыҙ-тел ижады, мәңгелек онотолмаҫ тарихи иҫтәлектәренән алынған көс, илһам менән тулыландырыу кәрәк.

Күптән түгел Башҡортостаныбыҙ ерендә легендар шәхес, Минлегәли Шайморатовҡа ҡуйылған һәйкәл бына шул рухи көс сығанаҡтарының береһе лә инде ул. Бөтә донъяла кешеләр үҙ урынын таба, күңел һыуһынын ҡандыра һәм тормош айышына төшөнә алмай ҡаңғырған ваҡытта башҡорт халҡы өсөн күк ҡабағы асылғандай тәьҫир итте был ваҡиға. Аяҙ күк йөҙө, ирек, милләттең киләсәге ниндәй ҡиммәт менән яулап алыныуы тураһында тағы бер ҡат иҫкә төшөрөп, үҙ батырҙарыбыҙҙан үрнәк алырға өндәй ул һин. Халыҡ батырының үҙ еренә әйләнеп ҡайтып, танылыу табыуын, уның рухы ҙурланыуын быуат буйы көттөк бит.

Быйыл, Әҙәбиәт йылында, республиканың төрлө райондары буйлап бик күп йөрөргә, халыҡ менән осрашырға тура килә. Тукай әйтмешләй, беҙҙә талантлы, дәртле, өмөтө һүрелмәгән кешеләр йәшәүен күреп һөйөнәм. Тормош һынауҙарына бирешмәй, тырышып эшләп, быһамын тигән донъя көткән милләттәштәр бар. Төрлө оптималләштереүҙәрҙән һүн да яңы шөғөл табып, үҙенең эшен асып ебәрә кешеләр. Быһа шундай кешеләрҙән өлгө алып, ең һыҙғанып эшләп йәшәргә кәрәк. Сөнки киләсәктә бөтә ил буйынса эволюцион күтәрелеш буласаҡ, шул саҡта башҡорт халҡы башҡаларҙан рухлы булыу йөһәтенән артта тороп ҡалырға тейеш түгел.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Календарҙа 17 октябрь Халыҡ-ара фәҡирлекте бөтөрөү өсөн көрәш көнө тип билдәләнгән. Фәҡирлек менән кем көрәшә, нисек көрәшә ала, тигәнерәк уйҙар борсомаймы һеҙҙе?



(Башы 1-се биттә).

***Алмас ШАММАСОВ, шағир, журналист:*** Кеше һәр ваҡыт гәҙел йәмғиәткә ынтылған. Сөнки, ниндәй генә осор булмаһын, бөтә кешелек тигеҙһеҙлек селтәрҙәренән арына алмайынса интегеп йәшәгән. 1871 йылғы Париж коммунаһы, 1917 йылғы үҙебеҙҙең проект, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәҙеллек принциптарына ҡоролған булыуҙарына ҡарамаҫтан, тулыһынса тормошҡа ашырыла алмаған. Ул ғына ла түгел, был идеялар хәҙерге ваҡытта йәмғиәт тарафынан инҡар ителеп йәки онотолоп, беҙ тағы ла шул уҡ мәңгелек һорауҙар алдына килеп баҫтыҡ: "Тигеҙһеҙлек булған, бар һәм артабан да буласаҡмы?", "Байҙар ғүмер буйына бай, ярлы ярлы булып ҡаласаҡмы?", "Идеаль йәмғиәт төҙөп буламы?", "Фәҡир йәки бай булыуына кеше үҙе сәбәпсеме, әллә был йәмғиәт ҡоролошона бәйлеме?" Шундайыраҡ уйҙар борсорға тейештер, минеңсә, XXI быуат кешеһен. Сөнки һәр аңлы, рухлы йөндә хәҙерге йәмғиәт тормошона, гәҙелһеҙ күренештәргә, ваҡиғаларға бәйле һорауҙар битараф ҡалдыра алмай ҙаһа!

Ғалимдар иҫбатлауынса, бөгөнгө технологиялар, мөмкинлектәр донъялағы барлыҡ кешеләр өсөн дә туҡ һәм бөтөн тормош тыуҙыра ала. Йәғни Ер шарындағы һәр кешенең кейем һәм аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителеп, һәр ғаиләнең үҙ фатирында тормош ҡороп, теләгән уҡыу йортонда белем алып, алдыңғы медицина технологияларын, фән асыштары менән ҡулланып, ижад, спорт менән рәхәтләнеп шөғөлләнеп, бәхетле тормош менән йәшәүенә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Йәғни, ябай ғына әйткәндә, фән һәм техника бөгөн шул тиклем үҫешкән ки, беҙ күптән инде коммунизмда, идеаль тигеҙ һәм бай йәмғиәттә йәшәй алыр инек.

Нинә улай килеп сыҡмай һуң? Быһың сәбәптәре яп-ябай. Илдәр, континенттарға хужа булып алған, күҙ алдына килтерә алмаҫлыҡ муллыҡта йәшәргә өйрәнгән, барлыҡ кешеләргә уйынсыҡ, ҡолдар итеп ҡарарға яратҡан олигархтар, эре корпорациялар, донъя мафияһына бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр кәрәкмәй. Сөнки донъя үҙгәрһә, уларға көн бөтәсәк бит. Шуның өсөн дә аслыҡ, фәҡирлек проблемаһын хәл итер урынға дәүләттәр бер-береһе менән һуғыш яланында ярыша, иң алдыңғы ҡорал тыуҙырырға ынтыла, донъя картаһын, тәбиғәт ресурстарын бүлешә, тартҡылаша, быға аҡсаһын да йәлләмәй, кәрәк икән, ябай кешенең кесәһенә яңынан-яңы һалымдар аша инеп, бюджет дефицитын ҡапларлыҡ миллиардтар эҙләй. Мәғариф, фән (айырыуса гуманитар фәндәр), һаулыҡ һаҡлау системаһы, мәҙәниәт һәм башҡа социаль мәсьәләләр, дөйөм алғанда, ябай халыҡ көнкүреше һәр ваҡыт икенсе, өсөнсө, унынсы планда ҡала. Системаны үҙгәртмәйенсә, фәҡирлекте, тигеҙһеҙлекте еңеп булмаясаҡ. Капиталистик парадигма ҡыҫаларында ла быға өлгәшеү мөмкин түгел. Социализм, гуманизм, мәғрифәтселек идеяларын ҡайтанан тергеҙеп кенә ниндәй ҙә булһа уныштарға өлгәшеп буласаҡ.

***Айгиз ЯҠШЫБАЕВ, ваҡытлыса эшһеҙ, Баймаҡ районы:*** Кем уйлап сығарған да был көндө һәм ул кемгә кәрәк? Фәҡирлек менән кем көрәшә? Йәмғиәтме, хөкүмәтме, дәүләтме? Ә йәмғиәт кемдән тора? Бындай көн билдәләнеүенән сығып фекер йөрөткәндә, йәмғиәт байҙарҙан һәм ярлыларҙан тора. Ә ғүмер буйы үҙенең фәҡирлегә менән көрәшеп тә, унышҡа өлгәшә алмаусылар дөйөм йәмғиәттең ярлылығын нисек еңеп сыҡһын? Тимәк, ярлылыҡ менән байҙар көрәшергә тейеш була. Ләкин урам һепереүсе менән сағыштырғанда ун тапҡырға күберәк килемгә эйә түрәгә лә, ярлыларҙан айырмалы рәүештә ҙур эш хаҡына, тағы ла ниндәйҙер өҫтәмә килем килтереүсе сығанаҡҡа эйә депутатҡа ла, сит илдәрҙә генә йәшәүсе олигархҡа ла был кәрәкмәй. Ярлылар кәмеһә, уларҙың да килеме әҙәйә, сөнки уға бил бөгөп эшләп йөрөүсе булмаһа, уның үҙенә тир түгергә кәрәк буласаҡ. Ә әлегә тиклем йөҙәрләгән кеше йәлеп ителгән эшмәкәрлекте ул бер үҙе алып бара алмаясаҡ. Тимәк, етештереүсәнлек кәмей һәм, шуға ярашлы, кесәһенә ағып торған байлыҡ та һайыға. Шуға күрә йәмғиәттең был ҡатламына бағажында эшсе ҡулынан башҡа бер нәмәһе лә булмаған ярлылар ҡатламы кәрәк, сөнки улар, астан үлмәҫ өсөн, осһоҙ ғына хаҡҡа үҙенең эшсе көсөн "бүләк" итәсәк.

Уҙған быуаттың аҙаҡтарында илебеҙҙә алып барылған сәйәсәттең тамыры ла йәмғиәтте байҙар һәм ярлылар ҡатламына бүлеүҙе күҙ уңында тотоп эшләнде. Халыҡтың дөйөм милке һаналған төрлө завод-фабрика һәм башҡа дәүләт милке айырым кешеләрҙекенә генә әйләнде. Һәм күплап ябылған дәүләт предприятиелары нан билдәһеҙлеккә сығарып ташланған меңәрләгән, миллионлаған эшсе уларға барып баш әйергә, икмәк хаҡына эшләргә мәжбүр булды. Шуға күрә байҙарҙың ярлылыҡ менән көрәшеү турағында һүҙ ҡуҙғатыуы бүрене һарыҡ көтөүенә көтөүсе итеп ҡуйылған мәҫәлде иҫкә төшөрә.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Тиҙҙән Башҡортостанда сәнәғәт роботтарын эшләү буйынса махсуслаштырылған предприятие асыласаҡ. Был хаҡта Рәсәйҙең тәрән тикшеренеүҙәр фонды советы рәйесе, Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Владислав Панченко менән осрашыуҙа республика Башлығы Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. "Рәсәйҙә сәнәғәт роботтары предприятиеһы юҡ. Ҡорамалдарҙың 100, хатта 120 проценты сит илдә етештерелгән, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Быйыл уҡ Рәсәйҙә тәүге сәнәғәт роботтары предприятиеһын төҙөй башлайбыҙ".

✓Өфө Конгресс-холлында Башҡортостан Республикаһы йәш депутаттарының Беренсе форумы булып үтте. Сарала 35 йәшкә тиклемге 700-ләп кеше ҡатнашты. Маҡсат - йәш депутаттарға үҙ территорияһында инфраструктураны үҫтереүгә ярҙам итеү. Яңы ойошторолған Йәш депутаттар ассоциацияһы шундай ярҙам үҙәге буласаҡ та инде. Бындай форум осраҡлы үткәрелмәне. Быйылғы 13 сентябрҙә булып үткән һайлауҙарҙа 35 йәшкә тиклемге 1100 йәш кеше депутат булып һайланды.

✓21-23 октябрҙә баш ҡала "ШОС һәм БРИКС илдәре тәбәктәренең бәләкәй бизнесы" Беренсе Форумы үтә. Унда ҡатнашырға 15 ил вәкилдәре ғариза биргән. Форумда 700 кеше ҡатнашыуы көтөлә.

✓Башҡортосандан 10 мәктәп Рәсәйҙең иң яҡшы уҡыу йорттары исемлегенә эләкте. Уларҙың 5-әүһе Өфөнән: 3-сө, 39-сы, 93-сө гимназиялар һәм 123-сө, 153-сө лицейҙар.

✓Быйылғы Рәсәй "Алтын көҙ -2015" агрофорумында Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге Гран-при яуланы. Башҡорт балына Рәсәй сифат билдәһенә кандидат исеме бирелде. Уҙаҡ өс конкурста ҡатнашты һәм барыһында ла алтын миҙал яуланы.

✓2016 йылда Башҡортостанда пенсионерҙың йәшәү минимумын 7842 һум күләмендә билдәләү күҙаллана. "Дәүләт социаль ярҙамы турағында"ғы Федераль законда ҡаралғанса, тап ошо сумма пенсияға социаль өҫтәмә билдәләү өсөн файҙаланыла. Был хаҡта Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың комитет ултырышында ҡаралған закон проектында ла теркәлгән. 2015 йылда пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн пенсионерҙың йәшәү минимумы дәүмәле 6513 һум тәшкил итте.

✓ *Шундай етәкселәр ҡулы аҫтында ла эшләргә тура килде: коллективтың "тын алышын" белеп тороу маҡсатында ул үҙе үк шулар араһынан махсус берәй "шымсы" тота ине. Стукач була инде йәғни, ошаҡсы.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ЕТӘКСЕ БУЛЫРҒА ӨЙРӘТМӘЙҘӘР,

## етәксе булып тыуалар

**Бөгөн бигерәк тә йәштәребеҙ араһында төп менеджер, йәғни ҙурмы, бәләкәйме - берәй коллектив менән етәкселек итергә ынтылғандар күп. Бындай ынтылыш насар түгел. Ләкин етәксе булыу - ул айырым талантҡа, шулай уҡ кешелек сифаттарына эйә булыу, тигән һүҙ икәнен дә үҙләштереһен ине йәштәр. Етәксе - үҙе бар яҡлап өлгө күрһәтеүсе, башҡаларҙың өлгөһөн, тәжрибәһен һанлаусы. Һүҙемде раҫлап, үҙемдең хеҙмәт юлында осраған ысын етәксе өлгөһө тураһында бер нисә һүҙ генә әйтергә теләгәйнем.**



...Ошо көндәрҙә генә яңы вазифаға тәғәйенләнгән бер танышым шулай тип һөйләп торҙо: "Миңә инеп, элекке хужаның ҡырын ғәҙәт-холоҡтарын, ҡылыҡмаҙарҙарын һөйләп, ошаҡлашып йөрөмәгеҙ, тип ҡырт киҫтем. Ҡолаҡ тынып ҡалды: коллективта хәбәр ташыуҙар шып туҡтаны".

Танышымдың был һүҙҙәре мине битараф ҡалдырманы: бына, исмаһам, етәксе! Бөтә түрәләр ҙә шулай принципиаль булһа ине. Юғиһә, шундай етәкселәр ҡулы аҫтында ла эшләргә тура килде: коллективтың "тын алышын" белеп тороу маҡсатында ул үҙе үк шулар араһынан махсус берәй "шымсы", хатта бер нисә кешенән "агентура" тота ине. Стукач була инде йәғни, ошаҡсы. Ундай әҙәмдәргә, әллә ни эш ҡырмаһа ла, план-йөкләмәләрен үтәмәһә лә, ел-ямғыр теймәй торғайны, иллә мәгәр кисә кем кем менән ултырып сәй эскән, улар ни хаҡында гәпләшкән, телефондан кем ниҙәр һөйләшкән - шунда уҡ етәксегә мәғлүм була ине. Заман үтә тора әкренләп эш мөхите, хеҙмәттәштәр мөнәсәбәте лә күҙ алдыбыҙҙа үҙгәрә, заманса көйгә һалына һәм яңы мәҙәни кимәлгә күтәрелә. Менеджерҙың эш этикаһы бөгөн башҡасараҡ талаптарға буйһондорола, уның хеҙмәткәрҙәргә мөнәсәбәте һәм талаптары ла билдәле бер сиктәрҙе ашатларға тейеш түгел һымаҡ. Был талаптар әлегә бар хеҙмәт коллективтарында ла үҙләштерелеп бөтмәйҙер, ни тиһәң дә, өйрәнелгән, ҡалыплашҡан тәртиптәрҙән еңел генә ҡотолоп булмай, күрәһең. Унан һуң, етәксе этикаһы күп йәһәттән дөйөм ҡабул ителгән нормаларға ярашыуҙан ғына хасил була торған нәмә лә түгел бит. Күп нәмә етәксенең ниндәй кеше булыуына, уның интеллект һәм мәҙәни кимәленә, эске донъяһына, күңел байлығына ла туранан-тура бәйле.

Ошо тәңгәлдә 1986 йылда "Башҡортостан" гәзите коллективына етәксе булып килгән баш мөхәрриребеҙ Мансур Әнүәр улы Әюпов хәтергә килә. Ул ваҡытта беҙҙең әле төшкә лә инмәгән заманса менеджерлыҡ ысулдарына эйә ине яңы мөхәррир. Ҡайҙан, нисек үҙләштергәндер ул заманса етәкселек күнекмәләрен - билдәһеҙ. Дөрөҫөрәге, ул бер ерҙә лә махсус әҙерлек курстары үтмәгәндер, моғайын. Уның етәкселек сифаттары, асылда, эш урынында уның кешелек сифаттары сағылышы ине, әлбиттә: ҡалыплашыуҙан азат, кешелекле булмышы, донъяға киң ҡарашы һәм интеллекты һөҙөмтәһе булғанлығын аңлайым мин хәҙер. Бер башлағас, әйтәйем инде. М.Әюпов мөхәррирлек иткән йылдарҙа "Башҡортостан" гәзите яңынан тыуҙы. Ижтимағи әүҙемлек, рухи күтәрелеш, һүҙ иреклеге, асыҡлыҡ йылдары ине ул осор. Яңы мөхәррирҙе беҙгә тап шул йылдарҙа Тәңребеҙ Үҙе ебәргәндер, тип уйлайым мин хәҙер ҙә...

Ә инде мәҡәлә башындағы фекер ебен ялғап, шуны ғына әйтер инем: был яҙғандарым унан алдағы мөхәррирҙе кәмһеткән йә яманлағандан түгел һис тә. Ул да заманына күрә шәп етәксе була алды. Ул беҙҙе грамоталы, объектив яҙырға өйрәтһә, Мансур Әнүәр улы яңыса фекерләргә өйрәтте, әммә бер ҡасан да имеш-мимеш, буш ғәйбәттәргә, хатта ул ысын хәбәр булған хәлдә лә, ҡолаҡ һалып, хеҙмәткәрҙәре хаҡында яман йә яңылыш уйҙа булманы. Хәйер, ундай хәбәрҙәр тыңлап ултырырға ваҡыты ла ҡалмағандыр. Ул йылдарҙа редакция штатында 50-нән ашыу кеше эшләне, яңы мөхәррир килгәс,"Башҡортостан"дың тиражы 100 меңдән дә артып киткәйне хатта. Хеҙмәткәрҙәргә мөнәсәбәт бер тигеҙ: һәр кем дөйөм эшкә индергән хеҙмәт өлөшө буйынса баһаланды. Бында инде әлегеләй бүлмә һайын йөрөп хәбәр йыйыусы ошаҡ тоҡсайҙарының бер кемгә лә кәрәге ҡалманы. Мансур Әнүәр улы юғары вазифаға (республика вице-премьеры итеп) үрләтелгәс, редакцияға төрлө йылдарҙа төрлө мөхәррирҙәр килеп-китеп торҙо, тик башҡаса инде коллективҡа ул етәкселек иткән йылдарҙағылай энтузиазм, ижади осош һәм табыштар, хәҡиҡәт тыуҙырыр сәмле бәхәс ҡорҙары әйләнеп ҡайтманы, ғүмер һәүетемсә үтә торҙо...

Бынан сығып, шуны әйтмәксемен: коллективтағы мөхит, шулай итеп, иң тәүҙә етәксе шәхесенә бәйле. Ул ниндәй - эш һөҙөмтәһе лә шундай. Хәҙерге көндә "Етәксе (менеджер) ниндәй булырға тейеш?" тигән темаға интернетта ла, китап магазиндарында ла методик әҙәбиәт тулып ята. Тик бына ул кәңәштәрҙе уҡып сығып ҡына яҡшы, заманса етәксе булыу мөмкинме икән һуң? Был вазифаға асылың тап килмәһә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# АҠЫЛЛЫ КӘҢӘШСЕ,

## ышаныслы иптәш

**Һәр кемдең яратып уҡыған һәм көтөп алған баҫмаһы бар. Мин үҙем тиҫтәләгән гәзит-журнал алдырам, ләкин шулар араһында иң күңелемә ятҡаны - "Киске Өфө" гәзите.**

Гәзит оҙаҡ йылдар үҙ уҡыусыларына аҡыллы кәңәшсе, ышаныслы иптәш, йәмғиәттәге бер мәсьәләгә лә битараф булмаған фекерҙәшкә әүерелде. "Киске Өфө"нө ғәҙел һүҙе, баш ҡала һәм тотош республика тормошон асыҡ, сағыу һәм дөрөҫ сағылдырыуы, актуаль проблемаларҙы күтәреүе, донъя масштабында барған хәл-ваҡиғаларҙы яҡтыртыуы өсөн ихтирам итәм. Ә баҫманың милләттәштәребеҙҙә ватансылыҡ төшөнсәһе тәрбиәләү, тыуған ергә һәм туған телгә хөрмәтле мөнәсәбәт тойғолары уятыу йәһәтенән алып барған эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ.

Гәзит биттәрендә баҫылған арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән булған әңгәмәләр һәр ваҡыт уҡымлы. Бындай мәҡәләләрҙең журналистар тарафынан айырыуса бер йылылыҡ менән яҙылыуы уларға үҙ геройын бөтә яҡлап та асыу мөмкинлеге бирәлер, тип уйлайым. Хеҙмәт кешеһен ваҡытында күрә белеү һәм ошо рәүешле яҡтыртыу - илебеҙҙең тотороҡло булыуында мөһим роль уйнай. Был йәһәттән "Киске Өфө" күп баҫмаларға үрнәк булып тора.

"Киске Өфө" - изгелекле, яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ өләшеүсе гәзит. Ул һәр ваҡыт заман менән бергә атлай, төрлө рубрикалар аҫтында донъя күргән мәҡәләләр күп төрлөлөгө һәм ҡыҙыҡлы булыуы менән айырылып тора. Үҙ уҡыусыһына ихтирам һәм иғтибарлы баҫмала социаль йүнәлештең ҙур урын алып тороуы ла бик оҡшай.

Гәзиттә халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө лә, үткәне лә, киләсәге лә сағыла. Бында һаулыҡҡа ла, хеҙмәткә лә, спорт һәм мәҙәниәткә лә ҙур иғтибар бирелә. Шулай уҡ файҙалы кәңәштәр, халыҡ дауаһы, этикет ҡағиҙәләре, кроссворд та баҫманы уҡымлы итә. Артабан да ошо йүнәлештән тайпылмай, халҡыбыҙҙың терәк-таянысы булып йәшәүегеҙҙе теләйем.

**Рәмилә ИСКӘНДӘРОВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөнөң 58-се лицейының математика уҡытыусыһы Рима Ронжина Рәсәйҙең иң яҡшы уҡытыусылары исемлегенә инде һәм Владимир Путин менән осрашты. Рәсәй Президентының "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы" лауреаттары менән осрашыуы Сочиҙа, "Сириус" белем биреү үҙәгендә уҙҙы. Быйыл педагогик оҫталыҡ смотрының һуңғы этабында 78 педагог ҡатнашты, уларҙың 15-е лауреат исеменә лайыҡ булды, бишәүһе финалға сыҡты.

✓2015 йылдың ете айы йомғаҡтары буйынса халыҡтың йән башына уртаса килеме 24 465 һум тәшкил иткән һәм былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 6,4 процентҡа артҡан. Хеҙмәткәрҙең уртаса айлыҡ эш хаҡы 25 087 һумға еткән, былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 3,7 процентҡа артҡан. Һуңғы өс йылда Башҡортостанда эш хаҡы - 1,13, Рәсәйҙә 1,15 тапҡырға артҡан.

✓Өфөлә Халдун Танер исемендәге халыҡ-ара драматургтар конкурсының республика этабына йомғаҡ яһалды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ТӨРКСОЙ проекты танылған төрөк драматургының тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланған. Конкурсҡа 50-нән ашыу пьеса авторы ҡатнашты, тип хәбәр итте Башҡортостандың Драматургия һәм режиссура үҙәге етәксеһе Әлиә Яхина. Комиссия Башҡортостан буйынса еңеүселәрҙе билдәләне. Улар - яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева ("Шәүлә" пьесаһы), Наил Ғәйетбаев ("Любезники-любизар...") һәм Мөнир Ҡунафин ("Люксембургҡа барғанда...").

✓Башҡортостанда икмәккә хаҡ ҡырҡа артмаһа ла, күпмелер дәрәжәлә ҡиммәтләнеү көтөлә, тип белдерҙе республиканың ауыл хужалығы министры Николай Коваленко. Был игенгә, кредит ресурстарына, ашламаға, техника һәм запас частарға хаҡ артыуға бәйләнгән.

✓Йыл башынан Башҡортостанда йәш водителдәр ғәйебе менән 280-дән ашыу юл һәләкәте теркәлгән. Уларҙа 33 кеше һәләк булған һәм 395 кеше төрлө йәрәхәттәр алған. Йәш водителдәр тарафынан яһалған юл һәләкәттәренең күбеһе - төкөтөү. Рәсәйҙә йылына 2,5 млн кеше водитель танытмаһы ала. Уларҙың күбеһе, әлбиттә, йәштәр.

**“Башинформ”дан.**

✓ *Әлеге ваҡытта Өфө ҡалаһы социаль торлаҡ төҙөү күләмен арттырыуға йүнәлеш алған. Был программа буйынса бер квадрат метрҙың хаҡы 33800 һум тәшкил итә.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы**

Райондың 60-сы лицейын хаҡлы рәүештә математик белем биреү үҙәге тиергә мөмкин. Быны Туапсе ҡалаһындағы "Орленок" Бөтә Рәсәй балалар үҙәгендә үткән 10-сы Көньяҡ математика турниры тағы бер тапҡыр раҫланы: был юлы лицей уҡыусылары "Өфө" командаһы составында ҡала намыҫын яҡланы һәм Премьер-лига ярыштарында 3-сө урынға лайыҡ булды.

**Совет районы**

94-се мәктәп тирында "Балалар спорты" Бөтә Рәсәй проекты сиктәрендә уҡтан атыу буйынса ярыштар үтте. Уны асыу тантанаһында проекттың республикалағы етәксеһе, Хәрби сәнғәт буйынса 30 тапҡыр донъя чемпионы Вил Ғабдуллин ҡатнашты. Ярышта 12-28 йәштәге спортсылар көс һынашты. Еңеүселәр 23 октябрҙә Мәләүез ҡалаһында үтәсәк Республика беренселегенә әҙерләнә.

**Дим районы**

Өфөнөң беренсе типтағы махсус (коррекция) дөйөм белем биреү мәктәп-интернатына "Газпромтрансгаз Уфа" компанияһы матур бүләк эшләне - хоккей майҙансығы бүләк итеп кенә ҡалманы, белем усағы биләмәһен дә төҙөкләндерҙе. Мәктәп-интернатта тәрбиәләнеүселәр спорт менән әүҙем шөғөлләнә, даими рәүештә призлы урындар яулай, һәр көн спорт уйындарына ваҡыт бүлә. Әммә иҫке майҙансыҡ етди спорт ярыштары уҙғарыу мөмкинлеген бирмәй. Яңыһы иһә барлыҡ талаптарға тап килә һәм ярыштар үткәреү өсөн стандарт ҡоролма булып тора.

**Киров районы**

28 октябрҙә киске сәғәт биштә М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның концерт залында (Октябрь революцияһы урамы, 3а) беренсе музыкаль алыш була. Унда инструментта уйнаусылар, вокалистар, шулай уҡ баш ҡаланың төрлө жанрҙа сығыш яһаусы музыкаль төркөмдәре ҡатнашасаҡ. "Иң яҡшы" исемен алыу өсөн 20 ҡатнашыусы үҙенең башҡарыу оҫталығын, импровизация һәләтен күрһәтәсәк, тамашасының һөйөүен яуларға тырышасаҡ.

**Ленин районы**

"Ал елкәндәр" берләшмәһенең "Эҙәрмән" ойошмаһына 35 йыл тулды. Юбилейҙарын улар слет итеп билдәләргә ниәтләй. Клубты ойоштороусы Альфред Сәхибзадаев белдереүенсә, тәрбиәләнеүселәр һуңынан үҙҙәренең туристик маршруттарын аса, сәнғәт альпинизмы менән шөғөлләнә. Клуб эшмәкәрлегенең икенсе йүнәлеше - ирекле ҡотҡарыу дружиналары. Улар тайгала, тауҙарҙа, йылғаларҙа, мәмерйәләрҙә, бәхетһеҙлек осраҡтарында һәм янғындарҙа кешеләрҙе ҡотҡарыу менән шөғөлләнә.

**Орджоникидзе районы**

13 октябрҙән алып 83-сө лицейҙың 5-се синыф уҡыусылары ӨДНТУ-ның музейына йөрөй. Улар бында башҡорт нефте тарихы һәм Башҡортостандың яғыулыҡ-энергетика комплексы үҫеше менән танышa.

**Октябрь районы**

Район хакимиәтендә урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр өсөн семинар үтте. Сараға Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығының әйҙәүсе эксперт-белгестәре лә саҡырылды. Эшҡыуарҙар уларҙың сығышынан үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алып ҡына ҡалманы, ҡулланыусыға үҙҙәренең тауары һәм күрһәткән хеҙмәте тураһында дөрөҫ мәғлүмәт биреү буйынса ла: предприятиеның алтаҡтаһын яҙыу, ҡулланыусы мөйөшөн булдырыу, хаҡтарҙы һәм тауарҙың ярлығын яҙыу, күрһәтелгән хеҙмәттәр буйынса килешеү төҙөү тәртибе менән дә танышты.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕМДЕҢ ЫҘБАҺЫ БЕЙЕК?



**Баш ҡалала торлаҡ төҙөү ыңғай үҫешә. Был хаҡта сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Александр Филиппов белдерҙе.**

Дөйөм алғанда, октябрь һуңына тиклем дөйөм майҙаны 630 мең квадрат метр тәшкил иткән торлаҡ тапшырыу күҙаллана. Шуға ҡарамаҫтан, муниципалитет кешеләрҙе уңайлы һәм сифатлы торлаҡ менән тәьмин итеүҙе үҙенең төп бурысы тип һанай. Шул сәбәпле төҙөүсе территорияны төҙөкләндереү буйынса талап ителгән эштәрҙе тамамламайынса, объект тапшырылмаған тип иҫәпләнә. Әлеге ваҡытта Өфө ҡалаһы социаль торлаҡ төҙөү күләмен арттырыуға йүнәлеш алған. Был программа буйынса бер квадрат метрҙың хаҡы 33800 һум тәшкил итә.

Төҙөлөш тармағында машиналар парковкалау урындары һәм паркингтар булдырыу айырым йүнәлеш булып тора. Муниципалитет төҙөүселәр алдына бер фатирға бер парковка урыны нормативын тәьмин итеү талабын ҡуя. Һуңғы йылдарҙа яңы торлаҡ комплекстары төҙөлөшө менән бер рәттән 30 меңдән ашыу парковка урындары ла булдырылды. Был "машинаһыҙ ихата" концепцияһын тормошҡа ашырырға ярҙам итә - автомобилдәр урамдан тура ер аҫты парковкаларына инә. Ә ихата территорияларын спорт, балалар майҙансыҡтары, ял урындары биләй.

# ЙЫЛҒА БУЛЫП АҒА ҺӨТ!



**Ҡаланың иҡтисади нигеҙендә сәнәғәт комплексы тора. Өфө предприятиелары республикала етештерелгән продукцияның яртыһынан күберәк өлөшөн ала.**

Шул уҡ ваҡытта муниципалитет инвесторҙар йәлеп итеүгә, урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙамлашыуға, уны үҫтереүгә етди иғтибар бүлә. Был йүнәлештәге эшмәкәрлек миҫалы итеп "Өфө ҡала һөт заводы" яуаплылығы сиклөнгән ширҡәтте килтерергә була. Ул - 2012 йылда ябылған завод урынында 2015 йылда һауыттарға тултырылған һөт, әсетелгән һөт ризыҡтары, май, эремсек етештереү һәм һатыу буйынса асылған предприятие. Был инвестиция проектын тормошҡа ашырыуға республика һәм муниципаль власть органдары ярҙам ҡулы һуҙа: ер участкалары, һалым льготалары бирә, инженер селтәрҙәре менән тәьмин итә. Яңы предприятие 100 кешегә эш урыны булдыра. Тауар сауҙа селтәрҙәре аша һатыла, шулай уҡ Ырымбурға, Һамарға, Пензаға, Ульяновскиға оҙатыла. Сеймал менән Өфө, Ауырғазы, Бөрө райондары хужалыҡтары тәьмин итә.

# ЕТЕМДӘР ҺАНЫ КӘМЕЙ



**Һуңғы өс йылда Өфөлә ҡайтанан асыҡланған етем балалар һаны - 40, интернаттарҙа тәрбиәләнеүселәр һаны 50 процентҡа кәмегән. Был опека органдары тарафынан социаль етемлекте профилактикалау, ғаиләләрҙе реабилитациялау һәм уларҙы даими күҙәтеп тороу эшмәкәрлегенә һөҙөмтәһе.**

Әлеге ваҡытта баш ҡалала 18 йәшкә тиклем 207 мең бала иҫәпләнә. 1 октябрҙә ҡарата опека һәм попечителлек органдарында ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 2,8 мең етем бала иҫәптә тора. Шуларҙың 87 проценты уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алынып, ғаиләләрҙә тәрбиәләнә. Шул уҡ ваҡытта ғаиләләргә урынлаштырылыусы балалар һаны элекке кимәлдә ҡалған. Быға бындай ғаиләләргә сәләмәтлек мөмкинлектәре сиклөнгән һәм олораҡ балаларҙы урынлаштырыу сәбәпсе.

9 айҙа ғаиләләргә 370 бала урынлаштырылған. Уларҙың 15 проценты Өфөгә, ҡалғандары республика райондарына һәм илдең башҡа төбәктәренә бирелгән. Әлеге ваҡытта опека органдары өсөн балаларын кире алған ғаиләләрҙе социаль-психологик яҡтан тәьмин итеү беренсе планға сыға. Белгестәр шундай 237 ғаилә һәм 337 бала менән эшләй. Быйыл күҙәтеү аҫтына 106 ғаилә һәм 150 бала алынды. Улар - балаларҙы үҙ ғаиләһендә ҡалдырыу йәки ҡала учреждениеларына тапшырыу тураһында һүҙ күтәрелгән ғаиләләр. Шундай эшмәкәрлек арҡаһында үҙ ғаиләләренә - 84, ә быйылғы 9 айҙа 33 бала кире ҡайтарылған.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘМӘКЕСЕГӘ ЯҢЫ ТАЛАПТАР

**Рәсәйҙә тәмәке тартыу урындарына ҡарата яңы талаптар көсөнә инәсәк. Был талаптар күп фатирлы йорттарҙағы, махсус билдәләнгән һәм асыҡ урындарға ҡағыла.**

Атап әйткәндә, асыҡ һауала тәмәке тартыу урындарында хәҙер тәмәке һауыттары һәм төнлектән ҡараңғы мәлдәрендә яһалма яҡтыртҡыстар ҡуйылырға, ә махсус билдәләнгән биналар иһә ишектәр, ут һүндергестәр һәм һауа алыштырғыс торбалар менән йыһазландырылырға тейеш. Күп фатирлы йорттарҙағы, махсус билдәләнгән урындарҙағы һәм алыҫ араға пассажир судноларындағы тартыу урындарына ҡағылышлы был талаптар 14 октябрҙән үҙ көсөнә инә, тип хәбәр итә РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте.

Асыҡ һауала билдәләнгән урындарға "Тәмәке тартыу урыны" тигән билдәләр ҡуйыла. Яңы талаптар Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау, Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлыҡтары тарафынан эшләнде.

Рәсәйҙә йәмәғәт урындарында, шул иҫәптән кафе, ҡунаҡхана, хостел һәм дөйөм ятаҡтарҙа, шулай уҡ баҙар һәм башҡа сауҙа предприятиеларында, вокзал перрондарында, поездарҙа, аэропорттарҙа, алыҫ араға судноларҙа тәмәке тартыу 2013 йылдың 1 июненән тыйылғайны. Вокзалдар, порттар һәм аэропорттар биләмәләрендә тәмәке изделиелары һатыу ҙа тыйыла икәнлеген иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.

# АЙЫҠ ЙӨМА КӘРӘК!

**Роспотребнадзор Мәскәү депутаттарының йома көндәре алкоголь һатыуҙы тыйыу тураһындағы тәҡдимен хупланы.**

Халыҡ аҙыраҡ эскән һайын, милләт сәләмәтерәк буласаҡ, тип белдерҙе ведомство башлығы Анна Попова. Элегерәк Мәскәү Думаһы депутаттары был тәҡдимде тикшереүгә ҡуйыу хаҡында вәғәҙәләгәйне. Баш ҡалала

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Мәскәүҙә Бөтә Рәсәй табиптар конкурсы еңеүселәрен бүләкләнеләр. Еңеүселәр араһында Өфөнөң 4-се бала табыу йорто табибы Арсентий Грешилов, 2-се балалар поликлиникаһы табибы Гүзәл Ишмoратова, Стәрлетамаҡтың 10-сы поликлиникаһы табибы Людмила Михайлова, Республика клиник туберкулезға ҡаршы диспансеры табиптары Гүзәл Янбарисова, Элеонора Ҡәйүмова, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының табип-онкологы Рим Каланов, Республика балалар клиник дауаханаһы табибы Ирина Огородникова, БДМУ клиникаһы табибы Фәниә Шәймөхәмәтова бар.

✓ Башҡортостанда йәшәүсе 14 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙҙа күкрәк биҙе яман шеше асыҡланған, тип хәбәр итә төбәк Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте. Өфөлә биш мең ҡатын-ҡыҙ ошо сир менән теркәлгән. Быйыл республикала 1036 ҡатын-ҡыҙға шундай диагноз ҡуйылған, уларҙың 382-һе баш ҡалала йәшәй. Йыл һайын донъяла 1 миллиондан ашыу күкрәк биҙе яман шеше барлыҡҡа килеү осрағы теркәлә.

✓ Төркиәнең Измир ҡалаһында халыҡ-ара шашка буйынса шәхси-командa донъя чемпионаты тамамланды. Унда Рәсәй йыйылма командаһы составында билдәле шашкасылар Тамара Таһныҡкужина, Айгөл Иҙрисова, Айнур Шәйбәков, Муродулло Амриллаев та ҡатнашты. Өс көнлөк ярыш йомғаҡтары буйынса Башҡортостан спортсылары өс алтын һәм бер көмөш миҙал яуланы. Шәхси зачетта Тамара Таһныҡкужина ике тапҡыр көмөш, Амриллаев, Шәйбәков, Таһныҡкужина, Иҙрисова алтын миҙал яуланы. "Йәшен тиҙлегендәге программа, команда зачеты" дисциплинаһында Амриллаев менән Шәйбәков - чемпион, Таһныҡкужина менән Иҙрисова вице-чемпион булды.

✓ Өфөлә "Йәшлек-шоу 2015" республика йәштәр фестиваленә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Йыр бәйгеһендә республика һәм башҡа төбәктәрҙән 16 йәштән 35 йәшкәсә башҡарыусылар ҡатнаша ала. Конкурсҡа быға тиклем яңғырамаған өр-яңы йыр тәҡдим итергә тейеш. Ойоштороусылар иң яҡшы ҡатнашыусыларҙы 8 ноябрҙә Өфөгә саҡыра. Финалға 12 кеше сыға. Уларҙың береүһен тамашасылар һайлап ала. Ғаризалар 5 ноябргә тиклем yeshlek-show2015@mail.ru электрон почтаһына ҡабул ителә.

*✓ Сибай ҡалаһының "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары, уларҙың етәксеһе Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә ханымды аҡ кейеҙгә баҫтырып, ағинәйлеккә ҡабул итте, тәңкәле башҡорт һаҡалын бүләк итте.*



ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

# КӨНСЫҒЫШТЫ ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘР...



## башҡорт улын ололаны

**Үткән аҙнала баш ҡалала X Бөтә Рәсәй шәрҡиәтселәр съезы булып үтте. Абруйлы сарала Рәсәйҙән, сит илдәрҙән өс йөҙҙән ашыу ғалим ҡатнашты.**

Съезд вәкилдәрен Башҡортостан Башлығы Рөстәм Зәки улы Хәмитов сәләмләне һәм мәртәбәле эштәрендә уңыштар теләне. Пленар ултырышта РФ Дәүләт Думаһы Аппаратының Аналитика идараһы етәксеһе Андрей Евгеньевич Петров, Төркиә Фәндәр академияһы академигы, профессор Иҫәнбикә Туған, Халыҡ-ара төрки академияһы президенты, тарих фәндәре докторы, профессор Дархан Ҡыуандыҡ улы Ҡыҙырали, Тажикстан Республикаһы Фәндәр академияһы вице-президенты вазифаһын башҡарыусы - иҗтимағи фәндәр бүлеге рәйесе, философия фәндәре докторы Ҡараматулла Әлим улы Әлимов фекерҙәштәренә үҙ илдәренән сәләмен еткерҙе. Артабан съезд үҙ эшмәкәрлеген секцияларға һәм симпозиумдарға бүлеп дауам итте.

Симпозиумдарҙың береһе "Әхмәт-Зәки Вәлиди Туған һәм шәрҡиәттең актуаль мәсьәләләре" темаһына арналды. Ә.З. Вәлиди исемендәге республика китапханаһында уҙған симпозиум донъя кимәлендәге арҙаҡлы ғалимдың шәхесен һәм хеҙмәтен ололау, уның ғилеме аша милләтен күтәреү күренеше булды. Сибай ҡалаһының "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары, уларҙың етәксеһе Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә ханымды аҡ кейеҙгә баҫтырып, ағинәйлеккә ҡабул итте, тәңкәле башҡорт һаҡалын бүләк итте. "Был минең өсөн мәңге онотолмаҫ иҫтәлек булды", - тине сикһеҙ тулҡынланыу кисергән ҡунаҡ.

Симпозиум барышында докладтар уҡылды, тема буйынса һорауҙар бирелде, йәнле һөйләшеү, аралашыу алып барылды. Бигерәк тә Япониядың Токио университеты докторанты Оно Риосукеның, Төркиәнең Билкәнд университеты Донъя иҡтисады үҙәге директоры, профессор, доктор Субидәй Туғандың, Үзбәкстан Милли университет профессоры Мөхәмәтйән Абдырахмановтың, үҙебеҙҙең БДПУ профессоры Әхмәт Сәләймәновтың сығышы тыңлаусыларҙа айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Уйлап ҡараһаң, һәр бер докладсы Вәлидиҙең үҙ милләте, үҙ халҡы үҫешенә индергән өлөшө хаҡында мәғлүмәт бирҙе һәм былар барыһы бергә тотош бер оло иҗадты барлыҡҡа килтерҙе. Милләттәшебеҙҙең Көнсығыш илдәре, төрки халыҡтары өсөн башҡарған хеҙмәте, ысынлап та, баһалап бөткөһөҙ ҙур шул.

Легендар шәхесебеҙҙең исемен йөрөткән китапхана симпозиумды ҡаршылап, Вәлиди китаптарынан күргәҙмә ойошторҙо, ғалимдың эшмәкәрлеген мәңгеләштереү юҫығында алып барылған йүнәлештәре менән таныштырҙы. Заманында "дошман" әҙәбиәтен юҡ итеү бик ентекле алып барылһа ла, махсус фондтарҙың тырышлығы арҡаһында имен ҡалған Вәлиди китаптары һәм ҡулъяҙмалары китапхана тарафынан эҙләп алынған. Әҙиптең "Төрөк һәм татар тарихы" тип аталған тәүге фәнни эштәренең береһе китапхананың даны булып тора. Бында шулай уҡ "Буталсыҡ замандар һәм мосолмандарҙың батша Михаил Федорович Романовты һайлауҙа ҡатнашыуы", "Сағатай шағиры Лотфи һәм уның шиғырҙары", "Фирғәнә өлкәһендәге Көнсығыш яҙмалары" кеүек бер быуатлыҡ ғүмер кисергән яҙмалар ҙа һаҡлана.

З. Вәлидиҙең фәнни ҡомартҡыһын тулыландырыу йыллары ла китапхана тарихында айырым урын алып тора. 1996 йылдан алып биш йыл арауығында Милли китапханаға Мәскәү, Санкт-Петербург, Төркиә китапханаларынан ғалимдың 75 хеҙмәт күсермәһе ҡайтарылған. Иҫәнбикә Туған үҙе генә лә төрлө йылдарҙа атаһының сит илдәрҙә нәшер ителгән иллегә яҡын яҙмаһын йыйып тапшырған. Билдәле башҡорт ғалимы Әмир Юлдашбаев Вәлидигә бәйле булған өс йөҙләгән берәмек документтар туплап алып килеп биргән. Ҡыҫҡаһы, бөгөн был китапхана арҙаҡлы шәхесебеҙҙең барлыҡ баҫмалары ла һаҡлана һәм ул үҙ исемен тулыһынса аҡлай.

(Дауамы 7-се биттә).

әлегә быңдай тыйыу индереү ҡаралмай, ә бына Санкт-Петербургта уны тикшерәсәктәр. Мәскәү һәм Санкт-Петербург закон сығарыусылары башланғысын ЛДПР лидеры Владимир Жириновский ҙа яҡлап сыҡты.

## ВАҠЫТЫ ҮҘГӘРЕРМЕ?

**Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы Белем көнөн 1 сентябрҙән икенсе ваҡытҡа күсереү тураһында һорау алыу уҙғара.**

Уҡыу йылының башланыу ваҡытын үҙгәртеүҙең маҡсатҡа ярашлы булыуы тураһындағы аналитик доклад 15 ноябргә әҙер булырға тейеш. Ошо ваҡытҡа тиклем министрлыҡҡа ата-әсәләрҙең, уҡытыусыларҙың фекерен белеү маҡсатында социологик һорау алыу бурысы йөкмәтелгән. Әйткәндәй, "Рәсәй уҡытыусыһы" конкурсының быйылғы финалистары 1 сентябрь - Белем көнөн икенсе ваҡытҡа күсереүгә ҡырҡа ҡаршы.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА
әҙерләне.

БЫЛ - МӨҺИМ

# ПЕНСИЯНАН ҺУҢ ДА ТОРМОШ БАР

**Яңыраҡ илебеҙ Оло йәштәгеләр көнөн билдәләп, өлкән быуынға үҙенең хөрмәтен, иғтибарын еткерергә тырышты. Быйыл байрамдың Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләгән осорҙа үтеүе айырыуса әһәмиәтле, сөнки тап ошо ҡаһарман быуын, ҙур берҙәмлек, ныҡышмалылыҡ күрһәтеп, Тыуған ил азатлығын һаҡланы, ҡатмарлы ауыр дәүерҙә емерелгән халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырҙы. Ветерандарыбыҙ бөгөн дә йәштәргә рух ныҡлығы өлгөһө күрһәтә, бай тормош тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Үкенескә ҡаршы, әлегә Рәсәйҙә ҡарттарҙың тормош сифаты юғары, һәр кемде ҡәнәғәтләндерерлек тип әйтеп булмай. Пенсия күләме ололарҙың физик һәм рухи ихтыяжына яуап бирмәй, торлаҡ-көнкүреш уңайлыҡтары ла хәл итеүҙе көтә. Хаҡлы ялдағыларҙың йәшәү шарттарын, сәләмәтлеген нығытыу өсөн алда байтаҡ эштәр башҡараһы бар.**

Ошо байрам көнөндә һуғыш ветерандарының республика клиник госпиталенә телевизор бүләк итеп, өлкәндәргә йөрәктән сыҡҡан иң йылы һүҙҙәрен еткерергә килгән Дәүләт Думаһы депутаты, "Мираҫ" хәйриә фонды рәйесе Сәлиә Мырҙабаеваға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек: ҡартлыҡҡа һау-сәләмәт көйө барып етеү мөмкинме? Ветерандарҙың медицина-социаль проблемалары хоҡуҡи яҡтан нисек көйләнәсәк?

- Һис һүҙһеҙ, өлкәндәргә медицина-социаль ярҙам күрһәтеү системаһын камиллаштырыу мотлаҡ, - тип һөйләне Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы. - Күҙаллауҙар буйынса, 2050 йылға донъяла өлкәндәр һаны ике миллиардтан ашасаҡ. Рәсәйҙә әле хаҡлы ялдағылар 34 миллион тәшкил итә, йәғни ул 15-30 йәшлектәр һанына тигеҙләшкән. Был күренеш бик тә тәбиғи, сөнки дәүләт тарафынан уртаса ғүмер оҙайлылығын арттырыу буйынса етди саралар күрелә. Былтыр ҡатынҡыҙҙың уртаса ғүмер оҙонлоғо - 76,5, ә ир-аттыҡы 65,3 йәшкә етте. Бөгөн геронтология хеҙмәтен үҫтереү буйынса байтаҡ эш башҡарыла, белгестәр әҙерләнә, хеҙмәттәр яҙыла. Демографияһы бындай үҙгәрештәр пенсия менән тәьмин итеүгә сығымдарҙы арттыра, медицина һәм социаль хеҙмәтләндереүҙә ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Шуға күрә хәҙергән яңы бурыстарҙы хәл итеү юлдарын эҙләү зарур.

Беҙ бөгөнгә шарттарҙа ла өлкәндәрҙең тормош сифатын тейешле кимәлгә еткерҙек тип әйтә алмайбыҙ. Халыҡты ҡабул итеү барышында ололарҙың дәғүәләрен, тәҡдимдәрен йыш ишетергә, өйрәнергә тура килә. Хеҙмәт ветерандарының пенсия күләме лә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Илдә һуғыш ветерандары өсөн 63 госпиталь эшләй. Уларҙың социаль әһәмиәтен иҫәпкә алып, учреждениеларҙы ябыу, ҡулайлаштырыу мәсьәләһен Хөкүмәт кенә хәл итә ала. Ветерандарға медицина ярҙамын сифатһыҙ алыу хоҡуғы бирелгән. Быйылдан башлап һуғышта ҡатнашыусылар хәрби-медицина ойошмаларында ла дауалана ала. Ветерандар тураһындағы закон уларҙың йыл да диспансерлаштырыу үтеү мөмкинлеген гарантиялай. Ғүмерҙе һаҡлау өсөн үтә мөһим препараттарға хаҡты арттырмау буйынса ла сара күрелде. Льготаға эйә граждандарға дарыуҙар алыуға яңы норматив билдәләнде - бер кешегә 707 һум.

Халыҡтың ҡартайыу процесы ҙур тиҙлек менән барғанда өлкәндәрҙең ҡыуанысын хәстәрләү дәүләт сәйәсәтенең өҫтөнлөклө йүнәлешенә әүерелеүе гәжәп түгел. Ололарҙың медицина ярҙамына ихтыяжы урта йәштәгеләр менән сағыштырғанда 1,5 тапҡырға юғары, дауаханаларҙа дауаланыуға улар йышыраҡ мохтажлыҡ кисерә. Оло йәштәгеләрҙең уҙаллы поликлиникаға йөрөй алмауын, түшәктә ятыусы ауырыуҙарҙың хәлен иҫәпкә алып, өйҙә социаль-реабилитация хеҙмәттәре күрһәтеүҙе арттырыу буйынса эш йәнләндерелә. Беҙгә геронтология буйынса әҙерлекле белгестәр, вуҙҙар өсөн яңы уҡыу программалары һәм дисциплиналар кәрәк. Сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән ауырыуҙар медицина ярҙамын тулы күләмдә алһын өсөн медицина ойошмаларын тейешле ҡоралмалар менән йыһазландырыу тураһында ҡанунға үҙгәрештәр индерелеүе лә бик яҡшы. Закон 2016 йылдың 1 ғинуарынан көскә инә, әммә уға әҙерлек бөгөндән башланырға тейеш.

Динә ҒӘБДРӘХИМОВА.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иң шәп дауа

❖ Ҡулдарҙың бармаҡтары һәр ҡайһыһы бер ағза менән бәйле. Баш бармаҡ - үпкә, бронхылар, бауыр өсөн яуаплы. Йүткергәндә баш бармаҡҡа массаж яһарға, бигерәк тә тырнаҡ төбөнә баҫҡыларға кәрәк. Йүтәл баҫылғансы эшләгеҙ.

❖ Имән бармаҡ - ашҡаҙан-эсәк юлдары менән бәйле. Тырнаҡҡа баҫыу ауыҙҙағы ауыртыуҙы, теш һыҙлауҙы баҫа. Бармаҡтың урта өлөшө ашҡаҙан, бауыр өсөн, иң түбән өлөшө һәм баш бармаҡ менән икеһенең араһындағы йомшаҡ урын йыуан эсәкҡә бәйле.

❖ Урта бармаҡ - ҡан әйләнеше менән бәйле.

❖ Исемһеҙ бармаҡҡа массаж яһап, күңел төшөнкөлөгөнән, нервылар ҡуҙғыуынан ҡотолаһың.

❖ Йөрәк тибешен кәметеү, арығанлыҡты бөтөрөү өсөн устың үҙәк өлөшөнә массаж яһарға кәрәк.

### Арыһаң...

❖ 2-3 сәғәт буйы туҡтамай эшләп арығанда лимон менән 1 стакан һалҡын сәй эсергә.

### Тының ҡыҫылһа...

❖ 60 гр прополис, 40 гр яңы балауыҙҙы быяла йәки алюмин һауытҡа һалып, ҡайнап торған һыу эсендә торорға. Прополисты һөҙөп, өҫтөнә ҡатырғанан көпшә һымаҡ нәмә эшләп, боҫон һуларға кәрәк. Был алымды иртәнсәк һәм кис 10-15 минут буйы ҡабатларға.

### Фасоль

❖ Фасоль бөйөрҙә дауалай. 1 стакан фасолде 1 литр һыуға һалып, ҡапҡасы ябылған эмалле кәстрүлдә һүрән утта 2 сәғәт бешерергә. Бешкәс, һыуын бүтән һауытҡа бушатырға ла, фасолде иҙергә. Көнө буйы шуны ашайһың, һыуын эсәһең, тик бүтән төрлө ризыҡ ашамайһың. 1 аҙна буйы шулай дауаланһаң, бөйөрҙә тулыһынса һауыҡтырырға була.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Ҡалған пингвиндар шым ғына алыҫтан беҙҙе күҙәтә, ә "командир-пингвин" беҙгә яҡын уҡ килде һәм махсус ҡоролманы ҡарарға кереште. Ҡыҙыҡ күреп, беҙ уға ҡул һуҙһаҡ, ҡанаты менән тейеп-тейеп алырға ла тартынманы!*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# БАҠ-БАҠ, БАҠЫЛДАП

**Кешеләрҙең айырым бер төркөмө изге иҫәпләнгән кейек-хайуан, ҡоштарҙан барлыҡҡа килгән, тигән ҡараш өйрәккә лә ҡағыла. Үҫәргәндәрҙең - сөрәгәй, ҡыпсаҡ һәм үҫәргәндәрҙең өйрәк, юрматыларҙың бәбкә аралары ошолар тураһында дәлилләй ҙә инде.**

Ҡыпсаҡ һәм тамъян ырыуы шәжәрәһендә Ҡушай менән Үрәкәй антропонимдары осрай. Ҡушай - "ҡушы" (өйрәктең бер төрө, сумыусы өйрәк) һүҙенән, ә Үрәкәй исеме "өйрәк" тигәндән килеп сыҡҡан булыуы ихтимал. Әкиәт батыры Ҡараса менән бөгөнгө заман башҡорттарында осраған Ҡарасов фамилияһы боронғо башҡорттарҙың тотемик ҡараштары менән бәйле: "ҡараса" һүҙе "ҡара өйрәк" тигәнде белдерә.

"Урал батыр" эпосындағы Айһылыуҙы хәтергә төшөрһәк, борон башҡорттарҙың тәү инәһе Ҡояш ҡыҙы Һомай ғына түгел, уның атаһы буйынса һеңлеһе өйрәк образындағы Ай ҡыҙы Айһылыу ҙа иҫәпләнеүе бар. Айһылыу менән Шүлгәндең никахынан Һаҡмар тыуа, ул тәү ата һәм мәҙәни герой, ерҙе барлыҡҡа килтереүсе демуирг Уралдың көрәштәше. Тотемик артефакттар түңәрәгенә ағастан өйрәк йәки тотҡаһы өйрәк башы формаһында яһалған ижауҙарҙы ла индерергә була. Улар ҡымыҙ ҡойоу өсөн тәғәйенләнгән. Тимәк, был формаларҙы аҙыҡ-түлекте ишәйтеү, уны бәрәкәтле итеү өсөн ҡулланғандар. Бындай юғары сәнғәт өлгөләре ҡәҙерле ҡунаҡтар килгәндә генә сығарылған, шуға ла уларҙың баштараҡ йола башҡарыу атрибуты булыуы бар.

1978 йылда сәнғәт белгесе Р. Сөләймәнов тарафынан Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылында билдәле ҡурайсы Кәрим Дийәровтан боронғо бейеү көйө "Ҡара өйрәк"те яҙып алған. Был көйгә ир-егеттәр яңғыҙ бейеү башҡарған.

"Дәүләкән ынйылары" тигән йыйынтыҡта тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ мәғлүмәт осраны. 1900 йылдарҙа ошо районның Ҡаҙанғол ауылында һуғым ашында ҡатын-ҡыҙҙар "Үрҙәк бейеүе"н башҡарған. Ул түбәндәге таҡмаҡҡа башҡарыла:

*Баҡ-баҡ, баҡылдығы - мин баҫамын ваҡ-ваҡ,*
*Бына шулай йөҙөп киләм*
*һөйгәнемдең янына...*
*Баҡ-баҡ, һөйгәнем, һин ҡарайһың яҡ-яҡ,*
*Кинйәкәйем, ашарға тап,*
*һин бит йорттоң хужаһы...*
*Баҡ-баҡ, баҡылдап, бергә йәшәү күңелле,*
*Йорт хужаһы иҫән булып,*
*ата үрҙәк булғанда...*
*Баҡ-баҡ, баҡылдап, ҡанаттарымды ҡағам,*
*Бер аҙ күрмәй, әҙерәк торһам,*
*һөйгәнемде һағынам.*

Күренеүенсә, бейеү ҙә, таҡмаҡ та инә өйрәк булып ата өйрәккә бағышлана. Бейеү элементтарында ярамһаҡланыу ҙа һиҙелә һәм был бөтөн бындай йола бейеүҙәренә хас була.

Шулай итеп, башҡорт халыҡ ижадында өйрәктең тотем ҡош булып иҫәпләнеүен дәлилләүсе сюжеттар күп. Ул һаҡлаусы, яҡлаусы, шул уҡ ваҡытта бәрәкәт килтерә торған ҡош.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Нурсилә Ишкилдина Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында тыуа, бәләкәй сағында ата-әсәһе менән Ханты-Манси округы Радужный ҡалаһына күсеп китә. Бала саҡтан уҡ уны география фәне ылыҡтыра һәм ер-һыуға булған һөйөүе уны Санкт-Петербург дәүләт университетына алып килә. Унда Нурсилә Ер тураһындағы фән институтының океанология кафедраһында биш йыл дауамында тырышып белем ала. Йәй көндәрендә Аҡъярҙа йәшәүсе өләсәһенә ҡунаҡҡа ҡайтып йөрөй. Яҡташыбыҙҙың планетабыҙҙың мәңгелек боҙҙар иле булған Антарктидала сәйәхәттә булыуын ишеткәс, ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡан сағын тап килтереп, уның менән әңгәмәләшеп алырға булдыҡ.**

# НУРСИЛӘНЕҢ ҠЫҘЫҠҺЫНЫУЫ -

## мәңгелек боҙҙар иле



- Ғөмүмән, ер-һыу темаһы миңә бик яҡын, - тип һөйләп китте Нурсилә. - Ер шарының 70 процент өлөшө һыу менән ҡапланған бит инде. "Ни өсөн шулай, һыуҙа нимәләр бар, һыу менән ҡапланған ҡитғаларҙа ниндәй тормош бар?" кеүегерәк һорауҙар мине һәр саҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Биш йыл эсендә үҙем өсөн ҡыҙыҡлы булған ошондай бик күп һорауҙарға яуап таптым. Практика мәлендә Азов, Аҡ диңгеҙҙә булырға, унда төрлө эксперименттар үткәрергә насип булды. 4-се курста уҡығанда Арктикаға йүнәләсәк экспедицияға эләктем, был минең өсөн бик мауыҡтырғыс сәйәхәт булды. Карск, Баренцев диңгеҙҙәрен иңләү аңлатып биргеһеҙ хис-тойғолар тыуҙырҙы. Бигерәк тә океан, боҙ, айсбергтар, пингвиндарҙы күҙәтеү онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы...

Яҡташым үҙенең сәйер ҙә, мауыҡтырғыс та сәйәхәтнамәһе тураһында бәйән итә. Ниндәйҙер ят терминдар, үҙенсәлекле ваҡиғалар... Мәҡәлә геройымдың фотоһүрәттәрен ҡарай башлағас, әйтерһең, интернет селтәрендә ниндәйҙер ят сайттың фотоларын ҡарап ултырғандай булдым. "Һеҙгә Антарктиданан бәләкәй генә иҫтәлекле бүләк", - тип диңгеҙ тулҡындарында йыуылған, йымылдап-ялтырап торған таш сығарып бирҙе сәйәхәтсе ҡыҙ.

2014 йылда университетты тамамлап, дипломлы гидрохимик-океанолог булып сыҡҡан Нурсилә Ишкилдина Арктика һәм Антарктида фәнни тикшеренеү институтына океанолог булып эшкә урынлаша. Күп тә үтмәй, Рәсәй Антарктида экспедицияһы сәйәхәтселәре менән "Академик Федоров" фәнни-тикшеренеү судноһында сәфәргә сыға. Был экспедиция 2014 йылдың ноябренән ағымдағы йылдың май айына тиклем дауам итә.

- Судно алдан билдәләп ҡуйылған бурыстарҙы үтәй. Ете ай дауамында беҙ ғилми тикшеренеүҙәр менән булыштыҡ, үҙебеҙ өсөн байтаҡ ҡына асыштар яһаныҡ. Мәҫәлән, пластмасса стакан алабыҙ ҙа, уға фломастер менән төрлө яҙыуҙар яҙып, бер нисә саҡрым тәрәнлектәге диңгеҙ төбөнә төшөрәбеҙ. Оҙаҡ тотмайынса, кире сығарғанда тәрәнлекте "күреп" сыҡҡан яҙыулы стакан кесерәйеп ҡалған, әммә яҙыуы юйылмаған була. Был диңгеҙ төбөндә һыуҙың баҫымы шул тиклем көслө икәнлеген аңлата. Шулай уҡ диңгеҙ төбөндәге һыуҙың составын тикшереү эштәре алып барҙыҡ.

Антарктидала ҡайһы бер илдәр үҙҙәренең станцияһын төҙөй. Антарктида - уникаль материк, унда кеше йәшәмәй, бары тик тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр өсөн генә баралар. Ул тарафта цивилизацияның әҫәре лә юҡ, һәм ошо яғы менән ул күңелгә ял бирә кеүек. Техника, күмәк халыҡ тауышы юҡ, тәбиғәт менән күҙгә-күҙ ҡарашып торған һымаҡһың. Ҡайһы бер экспедиция төркөмдәре ҡышҡылыҡҡа ла ҡалып тәжрибә яһай - уларҙы "зимовщиктар" тип йөрөтәбеҙ. Ҡышҡылыҡҡа ҡалыу өсөн, әлбиттә, сәләмәтлегеңдең ныҡлы булыуы, рухи яҡтан көслө булыуың мөһим. Киләсәктә ошо йүнәлеш буйынса үҙемдең программамды әҙерләгем килә, - тип киләсәккә маҡсаты менән дә уртаҡлашты Нурсилә.

Сәйәхәтсе ҡыҙ Атлантик океан буйлап сәйәхәт итеү менән генә сикләнмәй: Германияла Бремерхафен ҡалаһында, алдан хыял иткән Көньяҡ Африкала Кейптаунда булып, Өҫтәл тауына менеп, Изге өмөт морононда ла булып ҡайтҡан. Уның һүҙҙәренсә, бигерәк тә 15-16 быуаттарҙағы Бөйөк Географик Асыштар осоро сәйәхәтселәре исеме менән бәйле урындарҙа булыу хәтерендә уйылып ҡалған.

Әйткәндәй, ҡайһы бер ҡыҙыҡлы хәтирәләре менән дә уртаҡлашты Нурсилә. Мәҫәлән, беҙҙең өсөн ят булған, ишетеп кенә белгән пингвин, диңгеҙ бесәйе, тюлень кеүек хайуандарҙы ул көн һайын тиерлек күреп, хатта яҡындан "аралашып" йөрөгән. Пингвиндар хаҡында бигерәк яратып һөйләй ул: "Пингвиндар бик ҡыҙыҡһыныусан һәм кешеләргә яҡын килергә ҡурҡмайҙар. Гляциологтар төркөмө боҙға төшөп, боҙҙоң ҡалынлығын үлсәп, тикшеренеү өсөн боҙ пробалары алып йөрөгәндә илле метр тирәһе арала беҙгә 5-6 пингвин яҡынлашты. Уларҙың берәүһе бик батыр булып сыҡты, буғай, командир кеүек, иң алдан килә, тегеләре йайлаңҡыраһа, туҡтап, артҡа борола ла, иптәштәрен саҡыра (ҡанатын болғағандай итә һәм ниндәйҙер сырҡылдаған тауыш бирә). Ҡалған пингвиндар шым ғына алыҫтан беҙҙе күҙәтә, ә "командир-пингвин" беҙгә яҡын уҡ килде һәм махсус ҡоролманы ентекләп тороп ҡарарға кереште. Ҡыҙыҡ күреп, беҙ уға ҡул һуҙһаҡ, ҡанаты менән тейеп-тейеп алырға ла тартынманы! Был беҙҙең өсөн бик мәрәкә хәл булды", - тип күңелле сәйәхәтенең бер өлөшөн һөйләп ишеттерҙе Нурсилә.

**Айгизә АСҠАРОВА.**
**Хәйбулла районы.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БАТЫР ҺЫНЫ ҠАЙТТЫ...

## башҡорт иленә



**Ҡырмыҫҡалы районы Боҙаяҙ ауылында Салауат Юлаевтың көрәштәше, полководец Ҡәнзәфәр Усаевҡа һәйкәл асылды. Республика көнө алдынан үткән был тантана районның 85 йыллығына арналған саралар сиктәрендә ойошторолдо. Унда Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы Фәнзил Фәйез улы Сынғыҙов, һәйкәл авторы, рәссам, тарихсы, журналист, Федерация Советы ағзаһы Рафаил Нариман улы Зинуров ҡатнашты.**

1773-1775 йылдарҙағы Е. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы халҡыбыҙ тарихының иң ҡанлы һәм иң аяныслы биттәренең береһе. Был ихтилал лидерҙарының береһе, полковник Ҡәнзәфәр Усаев та ғүмеренең аҙаҡҡы сәғәттәрен яуҙаштары Салауат Юлаев һәм Юлай Аҙналин кеүек үк, Балтик портында, һөргөндә ҡаршылай. Тыуған ил, туған халҡы азатлығы өсөн изге яуға күтәрелеп, иң ҙур язаға - үҙ ерендә йәшәүҙән мәхрүм ителгәндән һуң тотҡонлоҡта үткәргән 29 йылының һәр көнөндә көс биреп тороусы, ҡасан да булһа әйләнеп ҡайтыр-

***✓ Мин Зәки Вәлидизең төрки донъяһына ҡағылышлы барлыҡ эштәре менән дә таныш. Уны бөйөк аҡыл эйәһе итеп иҫәпләйем. Һеҙ, башҡорт халҡы, шундай шәхесегеҙ менән ысын мәғәнәһендә ғорурлана алаһығыҙ.***



ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

# КӨНСЫҒЫШТЫ ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘР...

## башҡорт улын ололаны



*Сибай ағинәйҙәре Иҫәнбикә Туғанды ошолай хөрмәтләне.*

(Башы 5-се биттә).

**Тәнәфес ваҡытында ҡунаҡтарға: "Съездың әһәмиәте нимәлә?", "Өфө хаҡында фекерҙәрегеҙ?" тигән теҙмәләге һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**

**Донган Радион Маадыр-оолович, тарих фәндәре кандидаты, Тыва университеты фәнни хеҙмәткәре:** Төрки халыҡтарының тарихы бер, шунлыҡтан уларҙың береһен генә айырып өйрәнеү әллә ни фәтүә бирмәй. Съездың әһәмиәте лә күмәкләп, төрлө яҡлап тамырҙарыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы өйрәнгән фәндәрҙе берләштереү ул. Беҙ бөгөн һәр беребеҙ төрлө тарафта өйрәнеп, тикшереп ятҡан темаларҙы Вәлиди берҙәм итеп өйрәнгән, асыҡлаған кеше. Ул - бөйөк ғалим. Көнсығыш илдәре менән ҡыҙыҡһынған кеше Вәлидиҙең хеҙмәттәре менән таныш булмай тороп, был өлкәне төшөнә алмаясаҡ.

Ә Өфөгә килгәндә инде, уны донъялағы иң гүзәл ҡалаларҙың береһе, тип уйлайым. Бында рух, милли колорит заман һыҙаттары менән бергә бирелә. Мәҫәлән, заманса бинала - милли орнаменттар, асфальтта - тирмәләр. Минең өсөн ошолар ҡыҙыҡлы булды.

**Караматулло Әлим улы Олимов, Тажикистан Республикаһы Фәндәр академияһы вице-президенты:** Был съезд беҙҙең өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Беренсенән, ул унынсы юбилей йылын билдәләй. Икенсенән, Рәсәй Көнсығышты өйрәнеү мәктәбе сиктәрендә эшләү - ул үҙе үк оло мәртәбә. Көнсығыш ул борон-борондан өйрәнеүселәр, тикшереүселәр өсөн ҡыҙыҡлы өлкә булған. Уның ғилеме, яҙмалары, теле, халыҡтары, ғөрөф-ғәҙәттәре әллә күпме ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы, сәйәхәтселәрҙе йәлеп иткән. Беҙ үҙебеҙ иһә уның вәкилдәре һәм бөгөн шул Көнсығышты үҙ күҙлегебеҙ, йәғни йәшәйешебеҙ аша бирә алабыҙ.

Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, сарала ҡатнашыусылар ҙа, ҡунаҡтар ҙа, тыңларға теләүселәр ҙә бихисап. Был үҙе үк Көнсығыштың әле лә актуаль темаларҙың береһе булыуын күрһәтә. Уның әле асылмаған серҙәре, өйрәнеләһе ғилемдәре байтаҡ.

Мин Зәки Вәлидиҙең Көнсығышҡа, төрки донъяһына ҡағылышлы барлыҡ эштәре менән дә таныш. Уны бөйөк аҡыл эйәһе, быуатҡа бер генә була торған күренеш итеп иҫәпләйем. Һеҙ, башҡорт халҡы, шундай шәхесегеҙ менән ысын мәғәнәһендә ғорурлана алаһығыҙ.

Өфөгә килгән һайын Салауат Юлаев һәйкәлендә булам. Уның Зәки Вәлиди кеүек үк халҡы мәнфәғәттәрен яҡлап, әммә саҡ ҡына икенсерәк юл менән көрәшеүен беләм. Был ҡала миңә бик яҡын. Бында минең фекерҙәштәрем, аңлашыр, аралашыр яҡын кешеләрем бар. Ҡала үҫеүҙән һәм камиллашыуҙан туҡтамай. Ул мине гүзәл республиканың баш ҡалаһы булараҡ әсир иткән.

**Дархан Ҡыуандыҡ улы Ҡадырали, Халыҡ-ара төрки академияһы президенты:** Съезд беҙҙе, төрки халыҡтарҙы, берләштерә, беҙҙең бер тарихлы, бер тамырлы икәнебеҙҙе иҫебеҙгә төшөрә. Киләсәктә бергә башҡарылған ғилми эштәр, асыштар тағы ла күберәк булһын ине.

Зәки Вәлидиҙең төрки донъяһының бөйөк шәхесе булыуы хаҡында телмәр алып килдем. Ғалимдың хеҙмәттәре хаҡында үҙем белеү генә түгел, йәш быуынды ла өйрәтәм. Уның хаҡында бик күпте һөйләй алам. Шәхестең яҙмышы үҙе бер ҡөҙрәт һәм хатта аяныслы бороloштары ла дөйөм кешелек, фән файҙаһына, тимәк, ниндәйҙер мәғәнәгә эйә булған, тип уйлайым. Вәлиди - ул дөйөм төрки ғалимы, уның бер милләттеке генә булыуы мөмкин түгел.

Өфөлә тыныс ҡына ултырып ял итер урындар күп. Бик таҙа ҡала, бер ерҙә лә сүп-сар күрмәҫһең. Салауат, Ете ҡыҙ һәйкәлдәре кеүек урындарҙа халыҡ ял итергә ярата, был уларҙың иҫтәлекле урындарға, йәғни тарихына битараф булмауын күрһәтә.

**Еркин Улан улы Байҙаров, философия фәндәре кандидаты, Алмаатаның Б.Р. Сөләймәнов исемендәге Көнсығышты өйрәнеү институты фәнни хеҙмәткәре:** Съездың әһәмиәте беҙҙең ошолай итеп аралаша алыуҙалыр, тип уйлайым. Мин, мәҫәлән, был сарала "Ҡаҙағстанда йәшәүсе үзбәк диаспораларының рухи үҫешендә исламдың роле" тигән темаға сығыш яһаным. Был теманы бөгөн бер мин генә түгел, Рәсәй, Көнсығыш илдәре кимәлендә өйрәнәбеҙ. Бөгөн иһә миңә съезд ошо һәм ошоға бәйле проблемаларҙы күтәреп сығырға мөмкинлек бирҙе.

Зәки Вәлидиҙең ижадын уҡымау, өйрәнмәү - ул үҙеңдең тарихыңды өйрәнмәү тигән һүҙ. Беҙ үҙебеҙҙе һәм шул иҫәптән башҡаларҙы ла хөрмәт итәбеҙ.

Өфөлә тәүге тапҡырмын. Һоҡланып ҡарап йөрөнөм. Йәшеллеккә, бөхтәлеккә иғтибар иттем. Йәштәр күп ҡалала. Матур кешеләр һәм йәштәр ҡалаһы булып хәтеремдә ҡаласаҡ Өфө.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

мын, тигән өмөтө аҡланды батырҙың, һыны булһа ла иленә әйләнеп ҡайтты. Һәйкәл асҡанда ҡойоп яуған ямғырҙы ла үҙебеҙсә Ерҙең, Күктең шатлыҡ йәштәре тип ҡабул иттек.

Һәйкәл полимербронзанан ҡойолған. Яугир бер ҡулына Ҡөрьән, икенсеһенә ҡылыс тотҡан. Уның башта дин әһеле, аҙаҡтан илен яҡлаусы яугир булып китеүе ошо рәүешле күрһәтелгән. Был Рафаил Нариман улының Пугачев полковниктарына арналған өсөнсө эше, Кинйә Арыҫлановҡа обелиск - Көйөргәҙе, Ҡаранай Моратовты һынландырғаны Стәрлебаш райондарында ҡуйылған.

Һәйкәл асыу тантанаһында геройҙың һигеҙенсе быуын бүләре - билдәле продюсер Радмир Усаев та ҡатнашты. "Бәләкәй саҡтан олатайым тураһында ишетеп беләм, Степан Злобин, Александр Пушкиндың яҙғандарын да уҡығанмын. Республикала Салауат Юлаев менән бер рәттән, уның яуҙаштарына ла иғтибар бүленеүе шатлыҡлы күренеш", - тине ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ бер ҡасан да үҙенең батырҙарын онотҡаны юҡ. Ҡәнзәфәр Усаевтың тыуған урыны хаҡында бәхәстәр булһа ла, тап Боҙаяҙ ере унан йөҙ башы яһап, яугир итә. Тыуған ере генә түгел, торған ере лә ҡәҙерле әҙәм балаһына. Унан һуң, авторҙың үҙе әйтеүенсә, батырҙарҙың милләте лә, тыуған ере лә мөһим түгел. Иле бар батыр хур булмаҫ, батыры бар ил хур булмаҫ, ти халыҡ, батырҙарыбыҙ ҡан ҡойоп яулаған тыныслыҡтың ҡәҙерен беләйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Ауылдарҙа тракторсылар, комбайнерҙар, агрономдар, зоотехниктар, табиптар), электромеханиктар, башҡа һөнәр белгестәре эшләй. Күпселек колхоздарҙа фәнни-техник персоналдың күпселеге үҙ колхозы мөхитенән сыға. Ошо ваҡыт эсендә ҡалаларҙа меңләгән башҡорт төрлө һөнәрҙәр буйынса юғары белем ала, йөҙҙәрсә инженер һәм техник белемен камиллаштыра. Башҡортостан территорияһында сәнәғәт предприятиелары артыуы һөҙөмтәһендә башҡорттар араһынан эшсе синыф вәкилдәре һаны арта. Ауыл менән ҡала араһындағы элекке айырмалыҡ йылдан-йыл юғала бара. Колхозсы крәҫтиәндәрҙең машина-трактор станциялары хеҙмәткәрҙәре менән берлектәге татыу эшмәкәрлеге бер маҡсатты алға ҡуя - дәүләттең иҡтисади ҡеүәтен төрлө яҡлап үҫтереү. Ауыл ҡулланыусылар йәмғиәте магазиндарының һәм район магазиндарының киң селтәре ауыл халҡын кәрәкле тауар менән тәьмин итә. Башҡорт совет ҡала интеллигенцияһының төп массаһы ауылдан сыға һәм уның менән тығыҙ бәйләнеш тота. Был көнкүрештә генә сағылып ҡалмай, башҡорт халҡының һынлы сәнғәтендә генә түгел, хәҙерге художество ижадында ла сағылыш таба. Башҡорттарҙың ауыҙ-тел, бигерәк тә ауыл һәм яҙма художество ижады араһындағы тығыҙ бәйләнеш ауыҙ-тел һәм әҙәби ижадтың үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. КПСС-тың XIX съезы ҡарарҙары һәм артабанғы партия, хөкүмәт ҡарарҙары башҡорт халҡына иҡтисадын һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә бөтөн шарттар тыуҙыра.

Ҡыҫҡа ғына йомғаҡлау очеркында башҡорттарҙың хәҙерге көнкүрешенә нигеҙле характеристика биреү мөмкин булманы. Минең маҡсатым булып бары тик башҡорттарҙың тормошонда ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Ленин-Сталиндың аҡыллы милли сәйәсәте, туғандаш рус халҡының ярҙамы, партия һәм хөкүмәттең арыу-талыуһыҙ хәстәрлеге арҡаһында ҙур үҙгәрештәргә генә иғтибар йүнәлтеү булды.

Башҡорттарҙың хәҙерге көнкүреше нисек итеп артта ҡалған, батша Рәсәйенең ярым колониаль булған Башҡортостандың СССР-ҙың туғандаш халыҡтары ғаиләһендә, капиталистик стадияны ашатлап, социализмға күсеүен һәм үҫешкән сәнәғәте һәм ауыл хужалығы, йөкмәткеһе буйынса юғары социалистик һәм формаһы буйынса милли мәҙәниәткә әүерелгән уңышлы социалистик республикаға әйләнеүенең сағыу күренеше булып тора.

"Мәҙәниәт йөкмәткеһе буйынса йәмғиәттең һәр яңы осоро менән үҙгәрә", тигәндәй, совет этнографтары, атап әйткәндә башҡорттарҙың көнкүрешен өйрәнеүселәр, тәү сиратта иғтибарҙарын социалистик йәмғиәт төҙөү осорондағы көнкүреше һәм мәҙәниәтендәге етди үҙгәрештәргә һәм хәҙер, коммунизм төҙөү осоронда барған үҙгәрештәргә йүнәлтергә тейеш. Социализмдың еңеү осоро, И. В. Сталин яҙыуынса, милләттәрҙең һәм милли телдәрҙең ҡушылыуы өсөн кәрәкле шарттарҙы бирмәй, киреһенсә, был осор милләттәрҙең тергеҙелеүенә һәм сәскә атыуына ыңғай шарттар тыуҙыра икән, башҡорт этнографтары алдында үҙ халҡының милли үҙенсәлектәрен өйрәнеү буйынса ҡолас ташлап эшләрлек киң майҙан асыла.

Башҡорт халҡы әлеге ваҡытта үҙенең ғилми кадрҙарына, шул иҫәптән тарихсылары, телселәре, этнографтарына эйә. Шуға күрә башҡорт халҡының килеп сығышы, шулай уҡ уның форма буйынса миллилеге, мәҙәни йөкмәткеһе буйынса социалистик булыуы кеүек тулыһынса асыҡланмаған мәсьәләләр атап үтелгән ғалимдарҙың тикшеренеүҙәрендә тейешенсә яҡтыртылырына ышанам.

**(Аҙағы).**



**Күренекле ғалим, тарихсы һәм археолог, Башҡорт дәүләт университеты профессоры, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың вафаты хаҡындағы хәбәрҙе оло тетрәнеү һәм тәрән ҡайғы менән хәбәр итәбеҙ. Нияз Абдулхаҡ улы беҙҙең гәзиттең иң әүҙем уҡыусыһы ғына түгел, ә иң әүҙем авторы ла булды. Ул гәзитебеҙ сыға башлағандың тәүге көндәренән беҙгә Өфөбеҙҙең уртаһында, Пушкин урамы участкаһында, Ново-Мостовая менән Воровский урамдары араһында урынлашҡан, беҙҙең эраның баштарында барлыҡҡа килеп, XV - XVI быуаттарға саҡлы йәшәгән Өфө-II ҡаласығы тураһындағы хәҡиҡәтте тылҡыны. Ул нисәмә йылдар буйы ошо хәҡиҡәткә ғалимдарҙың, йәмәғәтселектең, власть башындағыларҙың күҙҙәрен асырға тип тырышты. Оло шәхесебеҙҙең хәҡиҡәтен тағы бер тапҡыр раҫлап, уның һәм башҡа ғалимдарҙың Өфө-II ҡаласығы тураһында әйткән һүҙҙәренә әйләнеп ҡайтайыҡ әле.**

# ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ,

## Тағы бер тапҡыр Нияз Мәжитовтың дәлилдәре,

**Нияз МӘЖИТОВ, тарих фәндәре докторы, профессор, академик:** Өфө-II ҡаласығы кемдәр тарафынан төҙөлгән, кемдең мәҙәни ҡомартҡыһы, тигән һорауға яуап өҫтә генә ята. Донъялағы IX быуаттан башлап табылған барлыҡ тарихи документтарға нигеҙләнгәндә, көньяҡ Урал, хәҙерге Башҡортостан, Уралтауҙың көнбайыш, көнсығыш битләүҙәре Башҡорт иле тигән исем менән йөрөтөлгән. Беҙ, археологтар, һуңғы егерме йыл эсендә боронғо яҙма документтар менән ҡыҙыҡһына башланыҡ. Был беҙҙе һығымталар яһарға мәжбүр итте. Ул сығанаҡтарҙың береһе - XII быуатта Урта диңгеҙ буйында йәшәгән бөйөк ғәрәп ғалимы Иҙриси яҙмалары. Ул Сицилия короле ҡушыуы буйынса донъяла йәшәүсе бар халыҡтар тураһында тарих яҙа. Уның китабында башҡорттарға бағышланған урын да бар. Ул көньяҡ Уралды Башҡорт иле тип атай һәм унда бер нисә ҡаланы урынлаштыра.

**Тағы бер сығанаҡ - Мәхмүт Ҡашғариныҡы.** Ул да төрки халыҡтары тураһындағы китабында башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә бер нисә ҡала барлығын яҙып ҡалдырған. Бынан өс йыллап элек тағы бер нисә үтә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә юлыҡтыҡ. Европа һәм ғәрәп ғалимдары Өфө йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, йәғни Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт тигән ҡаланы урынлаштыра. Өфөнөң боронғо исеме Башҡорт булыуы айырыуса әһәмиәткә эйә. Был туранан-тура Өфөнөң башҡортҡа ҡарағанын һөйләй. Ул ҡала Башҡорт тип аталған икән, унда кемдәр йәшәүе хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Ул ваҡытта Волга буйында Болғар, Субар, Биләр ҡаласыҡтары барлыҡҡа килә. Улар барыһы ла шунда йәшәүсе халыҡтарҙың исемдәре менән аталып йөрөтөлгән. Уларҙың рәтендә Башҡорт ҡалаһы ла бар һәм башҡорттар ул саҡтағы Башҡорт иленең баш ҡалаһын Башҡорт тип атаған.

Шул уҡ ваҡытта XIV быуаттан XVII быуатҡа тиклем Европа ғалимдары үҙҙәренең карталарында Өфө һәм Ағиҙел йылғаларының ҡушылған ерендә урынлашҡан ҡаланы "Паскарти" тип билдәләп килгән. Ул карталар донъя тарихында асыҡ итеп яҙылған реаль документ, факт, һәм хәҙерге Өфө урынында беҙҙең эра башында Башҡорт тигән ҡала булғанлы-юҡмы, тигән һорау бөтөнләй ҡуйылырға тейеш түгел. Был - ысынбарлыҡ һәм беҙ үҙебеҙҙең тарихтан баш тартмайбыҙ икән, быны танырға ғына тейешбеҙ.

Боронғо ҡаласыҡта йәшәүселәрҙең социаль планда ниндәй ҡатлам кешеләре булыуы хаҡында уларҙың ҡәберҙәрендә табылған материалдар ҙа һөйләй.

**Крайҙы өйрәнеүсе Р.Г. Игнатьев** 1786 йылда Өфөләге бер ҡәберҙә ике килограмдан ашыу алтын әйберҙәр сығыуы тураһында яҙа. Ошо әйберҙәр Екатерина II бүләк итеп ебәрелә. Ә 1836 йылда икенсе бер бай хандың ҡәберендә лә бик күп алтындар табыла. Улар араһында Византия императоры Феодосий II V быуатта ҡойолған алтын тәңкәһе табыла. Унда шулай уҡ алтындан ҡойолған башҡа әйберҙәр ҙә табыла. Шундай ҡиммәтле әйберҙәр бай ҡәбергә осраҡлы рәүештә генә килеп инмәгән һәм улар V-VIII быуаттарҙа Өфө территорияһында йәшәгән халыҡтың Урта Азия, Иран, Византия, Европа, Ҡытай дәүләттәре менән сәйәси, иҡтисади, мәҙәни бәйләнештә булыуы, ҡатнашып йәшәүе хаҡында ла һөйләй. Был факт инде Өфө-II ҡаласығының, ысынлап та, ҡала булғанлығын дәлилләй.

1936 йылда медицина институты бинаһы төҙөгәндә табылған алтын әйберҙәрҙең 10 процент самаһы ғына һаҡланып ҡала. Уларҙың ҡалған өлөшө шунда эшләүселәр тарафынан урлана. Нисек кенә булмаһын, яртышар килограмм саф алтындан эшләнгән әйберҙәр ярлы кешеләрҙең ҡәберендә булмай. Археология фәнендә ундай әйберҙәрҙе батша, хан кимәлендәге кешеләр ерләнгән ҡәберҙәрҙә табылған әйберҙәр менән сағыштыралар. Тимәк, хәҙерге Өфө урынында ултырған Башҡорт ҡалаһы ул саҡта ла Башҡорт иленең баш ҡалаһы булған һәм унда башҡорт хандары йәшәгән.

Өфө-II ҡаласығын тикшереүҙәрҙең башланырын ғүмер буйы көттөм. Рәсәй, Башҡортостан закондары буйынса, тарихи, археологик ҡомартҡылар урынлашҡан территория берәй төҙөлөш эше башларҙан алда фәнни яҡтан тикшерелергә, ә бындай тикшеренеүҙәр өсөн сығым ошо төҙөлөштө башҡарасаҡ ойошма иҫәбенә ҡапланырға тейеш. Ысынбарлыҡта, Өфө-II ҡаласығында төҙөлөш эштәре күптән башланған, ләкин территория ғалимдар тарафынан тикшереүгә дусар ителмәгән. XVII- XVIII быуаттарҙа уҡ хәҙерге Өфө сиктәре ошо иҫке ҡаласыҡҡа тиклем кинәйтелә һәм бында торлаҡ, хужалыҡ йорттары төҙөлә. Археологик ҡаҙыныуҙар алып барырға ошо биналар ҡамасауланы ла инде. 1960 йылдарҙа ҡаласыҡ дәүләт һаҡлауы менән тәьмин ителә торған федераль әһәмиәттәге уникаль тарихи-археологик ҡомартҡылар реестрына индерелде индерелеүгә. Шуға ҡарамаҫтан, был ҡаласыҡ территорияһы 2002 йылда әүҙем төҙөлөш эштәре районы итеп билдәләнде. Йәғни ҡаласыҡтың йәнәшендәге йырында ҙур бетон гараж төҙөлдө, уға юл һалыу өсөн ҡаласыҡ ситенән 4-5 метр киңлектә һәм 200 метр оҙонлоҡта майҙан киҫеп алынды. Хәҙер бында 2-4 метрға еткән культура ҡатламдары апаһыҡ булып күренеп ята. Ул ҡатламдар бөтөн килеш һаҡланған, кеше ҡулы теймәгән, емерелмәгән. Әммә йәнәшәлә алып барылған төҙөлөш эштәренән был ҡомартҡыны юҡҡа сығарыуы бик ихтимал.

Әле был майҙанда торлаҡ һәм хужалыҡ биналары урын алған. Ә ҡаласыҡтың буш майҙанында 1957-1958 һәм 1990 йылдарҙа ҡайһы бер разведка-ҡаҙыуҙар үткәрелгән булған. Ул саҡта был урында 4 метрға тиклем ҙур культура ҡатламдары барлығы асыҡланған. Уларҙың 2 метр тирәһендәге өҫкө ҡатламы XVII - XX быуаттарға ҡарай. Ә аҫҡы ҡатламында табылған бай табылдыҡтар - көршәк ватыҡтары, һөйәктән, быяла, тимерҙән эшләнгән әйберҙәр - беҙҙең эраның I быуатынан XIV-XV быуатҡа тиклемге осорға ҡарай. 129-131/1-се һәм 128-130/1-се торлаҡ йорттар араһында киң ур йәки соҡор һәм вал ҡалдыҡтары күренә, был үҙ ваҡытында ҡаласыҡтың тышҡы яҡтан һаҡлаусы нығытма менән уратып алынғанлығы тураһында һөйләй.

Беҙ, археологтар, БДУ-ның тарих факультеты студенттары менән бергәләп баш ҡаланың Пушкин, Ново-Мостовая урамдары һәм Салауат Юлаев проспекты араһындағы участкала археологик ҡаҙыныу эштәре алып барабыҙ. Әле күптән түгел генә был эштәрҙең һөҙөмтәһе донъя масштабындағы асыш менән билдәләнде: ҡомартҡы урынында балсыҡ һәм саман формаларҙан төҙөлгән киң һәм бейек стена асылды. Культура ҡатламы бик яҡшы һаҡланған, уның ҡалынлығы урыны менән 4 метрға барып етә. Табылған керамиканан, бронза, тимер, көмөш һәм алтындан яһалған әйберҙәр ҙә бик бай, төрлө-төрлө, улар V-VII, VIII-X, XI-XV быуаттарға ҡарай. XIII-XIV быуатҡа ҡараған Алтын Урҙа аҡсалары бик күп. Алтын ювелир әйберҙәр етештереү буйынса бай оҫтахана табылыуы - иң мөһим табыш. Культура ҡатламдары һәм табылған әйберҙәр Урта быуаттарҙа был урында ысынлап та ҙур ҡаласыҡ булғанлығын раҫлай.

Өфө-II ҡаласығының айырыуса ҡиммәте тағы ла шунда: ул үҙе һымаҡ тағы ике ҡаласыҡ - Дуҫлыҡ монументы территорияһындағы Өфө-III ҡаласығы һәм Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап нығытылған ҡәлғә-стена янындағы күп һанлы ҡурғандарҙан торған ҙур некрополь уратыуында урынлашҡан була. Был ҡурғандар Өфөләге төҙөлөш эштәре ваҡытында тулыһынса емерелгән. Төҙөлөш эштәре ваҡытында табылған, хәҙер музейҙарҙа һаҡланған алтын, көмөш, быяла әйберҙәр был урында башҡорттарҙың юғары ҡатламдары йәшәгәнлеген раҫлай. Бөтөн был ҡомартҡылар комплексы Урта быуаттарҙа бында административ, сауҙа һәм мәҙәни үҙәк булған эре ҡала урынлашҡанлығы тураһында һөйләй. Уның барлыҡҡа килеү ваҡытын билдәләүҙә Византияның V быуаттағы алтын тәңкәһе һәм башҡа сит яҡтарҙан килтерелгән әйберҙәр оло әһәмиәткә эйә.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы, профессор:** Башҡортостан, Өфө боронғо карталарҙа ҡасан барлыҡҡа килгән, тиһәк, тәү сиратта, Италия сауҙагәрҙәре ағалы-ҡустылы Пиҵиганолар 1367 йылда төҙөгән картаға күҙ һалырға кәрәк. Ул картала урта быуатта Италияның, Европа илдәренең Алтын Урҙа менән сауҙа иткән ваҡыты сағылдырылған. Шуға күрә унда Алтын Урҙаның 40-тан ашыу ҡалаһы, Иҙел, Кама буйҙары һүрәтләнгән. Шул иҫәптән бөгөнгө Башҡортостан ерендә Пашхарти ҡалаһы күрһәтелгән. Унан ары тағы бер "пашхарти" тигән яҙыу бар. Уныһы башҡорттар йәшәгән ер тигәнде аңлата. Пашхарти ҡалаһы иһә, гидрография яғынан ҡарағанда, Кама, Иҙел буйы тирәһендә урынлашыуы менән бөгөнгө Өфө еренә тура килә.

Европала эшләнгән карталарҙан да боронғораҡтары ғәрәп илдәрендә төҙөлгән. 1154 йылда **әл-Иҙриси эшләгән ике карта** бар. 70 биттән торған картала, ғәрәп географияһына хас булғанса, донъя ете иклимға (климатҡа) бүлеп ҡарала һәм Башҡортостан ере 6-7-се климатта күрһәтелә. Бында Урал тауҙары, Көньяҡ Урал, Атил, Волга йылғаларының башланған урындары, уларға ҡушылған Әй, Ағиҙел йылғалары күрһәтелгән. Шунда Ағиҙел буйында урынлашҡан Касра, Масра һәм Каракия ҡалаларын әл-Иҙриси башҡорт ҡалалары тип атай. Минең уйымса, Касра йә Масрала башҡорттар йәшәгәндер, шул ҡалаларҙың береһе Өфө булғандыр тип раҫларға була. Был башҡорт ерендә боронборондан ҡала булғанлығын да күрһәтә.

Археологик мәғлүмәттәрҙән тыш, яҙма ҡомартҡылар ҙа, шул иҫәптән боронғо карталар ҙа быға тик фараз тип кенә һаналған фактҡарҙы бермә-бер дәлилләй, ышандырырлыҡ итеп раҫлай.

**Картограф Авраам Крескес Арагон** короле Педро III ҡушыуы буйынса 1375-1377 йылдарҙа һигеҙ картанан торған атлас төҙөй. Һуңынан ул карталар донъяның Каталон атласы *(Tabula Catalona, Catalon Atlas)* тип атап йөрөтөлә башлай. Хәҙер ул Париждың Милли китапханаһында һаҡлана. Атластың бер өлөшө Рәсәйҙә тәүге тапҡыр Новороссийск университеты профессоры Ф.К. Брун тарафынан матбуғатта донъя күрә. Ул картала ла Кама йылғаһының һул яҡ ярында *Pascherti* (хәҙерге Өфө урынында) ҡалаһы күрһәтелгән.

Тарихсы-географ **Матвей Меховский** 1517 йылда Краковта сыҡҡан "Трактат о двух Сарматиях" тигән хеҙмәтендә башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙе Башкирия

✓ ***Европа ғалимдары төҙөгән урта быуат карталарында хәҙерге Өфө ҡалаһы "Паскерти", "Паскатир", "Пашхерти" тип атала. Хатта XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат башы карталарында ла Өфө ҡалаһы "Башҡорт" тип күрһәтелә.***



# БАШҠОРТ-ҠАЛА!

## иҫбатлауҙары тураһында

тип атай һәм улар үҙ телендә һөйләшәләр, тип яҙа.

Карталар тураһындағы һүҙҙе дауам итеп, күренекле фламанд картографы **Герард Меркаторҙың** эштәрен атап китергә була. Ул 1554 йылда Рәсәйҙең картаһын төҙөй. Унда Волга, Кама, Һамар, Ырғыҙ йылғалары төшөрөлгән. Ағиҙел йылғаһы буйында Өфө урынында *Pascherty* тип яҙылған, Урал тауҙары руссаға тәржемәлә "Каменный пояс"тип аталған.

XVII быуат башында Рәсәйгә бер нисә тапҡыр Голландия картографы һәм сауҙагәре **Исаак Масса** килә һәм Рәсәйҙең бер нисә варианттан торған картаһын төҙөй. Уларҙың береһендә Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡушылған урынындағы ҡала Өфө *(Pascharti)* тип билдәләнгән. Шулай итеп, Европа ғалимдары төҙөгән урта быуат карталарында хәҙерге Өфө ҡалаһы "Паскерти", "Паскатир", "Пашхерти" тип атала. Хатта XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат башы карталарында ла Өфө ҡалаһы "Башҡорт" тип күрһәтелә.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, рустар төҙөгән һуңғы карталарҙа ла Өфө ҡалаһы "Башҡорт" тип билдәләнгән. 1737 йылда Санкт-Петербургтағы Фәндәр академияһы "Яңылыҡтар һәм тарихи китаптар уҡыусы үҫмерҙәргә һәм барлыҡ уҡыусыларға файҙаға һәм ҡулланыу өсөн тәғәйенләнгән атлас" баҫып сығара. Был атластың авторҙары билдәһеҙ. Атлас барлығы 22 картанан тора. Уларҙың 18-се һанлыһында Азия картаһы төшөрөлгән. Унда Өфө ҡалаһы урынында Баскирь тигән яҙыу тора. Тимәк, рус картографтары Европаның урта быуат картографтары традицияларын бында күсергән, тигән һығымта яһарға була.

Барлыҡ карталарҙы өйрәнгәндән һуң, тағы шундай һығымта яһарға мөмкин: Өфө ҡалаһына 1574 йылда воевода Иван Нагой килгәс кенә нигеҙ һалына, тигән фекер төптө дөрөҫ түгел һәм ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН, тарихсы, тележурналист:** Өфөгә нигеҙ һалыныу датаһы тураһындағы бәхәстәр боронғораҡ материалдарға нигеҙләнеп алып барылырға тейеш. Драматик XIY быуат... Ҡаҙанды ла, Әстрханды ла баҫып алалар. Себергә Ермак һөжүм итә. Башҡортостан ул саҡта Нуғай урҙаһына ҡараған була. Нуғай кенәзлеге хакимы Исмаил бей Мәскәү менән дуҫлыҡ тураһында килешеү төҙөй. Кремлдә быны уларҙың баш һалыуы тип ҡабул итәләр һәм Көнсығышҡа "һикерергә" әҙерләнәләр. Исмаил бей үлгәс, Урыҫ бей хаким була һәм ул тәүҙән үк Рәсәйгә дошманлыҡ сәйәсәте алып бара. Ул үҙен бойондороҡһоҙ дәүләт башлығы итеп күрһәтергә тырыша, ләкин Мәскәүҙә инде былай тип иҫәпләмәйҙәр.

1586 йылда Ағиҙел буйлап воевода Иван Нагой етәкселегендәге һалдаттар отряды Имәнҡала нығытмаһына йөҙөп килә. Мәскәү уларға ошонда Өфө тигән урыҫ крепосы төҙөргә ҡуша ла инде. Был үҙен бойондороҡһоҙ тип иҫәпләгән хаким Урыҫ бей өсөн туранан-тура баҫып алыу һымаҡ ҡабул ителә. Урыҫ бей Иван Грозныйҙың улы батша Федор Ивановичҡа асыулы хат яҙа: "Һин дүрт урында - Өфөлә, Увекта, Һамарҙа, Аҡ Воложкала ҡала төҙөргә итәһең, ә ул биләмәләр минең атайым һәм олатайҙарым биләгән ерҙәр булған". Ноғай кенәзе грамотаһынан күренеүенсә, 1586 йылда Федор батша әле ҡәлғә төҙөргә йыйына ғына һәм һалдаттары килгәнсе бында инде Өфө булған була. Шулай итеп, ҡайһы бер сығанаҡтар 1586 йылда нигеҙ һалынған урыҫ Өфөһөнә тиклем үк урҙа Өфөһө булғанлығы һәм икенсеһе тәүгеһенең вариҫы икәнлеге тураһында һөйләй.

**Юлдаш ЙОСОПОВ, тарих фәндәре кандидаты:** Археологик ҡомартҡылар, Европа, шәреҡ ғалимдарының яҙмалары, карталар хәҙерге Өфөнөң боронғо Башҡорт ҡалаһы нигеҙендә ултырыуын тулыһынса раҫлай. Башҡорттарҙың үҙҙәренең тарихи хәтеренән теркәлгән яҙмалар ҙа был инаныуҙы нығыта. Ҡасандыр был урында башҡорттарҙың бөйөк ҡалаһы булыуын иҫләүе хаҡында Рычков яҙа. Шулай уҡ "Сыңғыҙнамә" дастанында ла Өфө йылғаһы тамағында ҡала булыуы, унда хан йәшәүе бәйән ителә. М. Өмөтбаевтың шәхси архивында үҙем өсөн ҡыҙыҡлы бер мәғлүмәткә юлыҡтым. Унда башҡорттарҙың күп һанлы ҡәлғәләре, етмеш ҡалаһы барлығы телгә алына. Уларҙың 1152 йылда Ислам динен ҡабул иткәнлеге лә теркәлгән. Ошо мәғлүмәттән сығып, шундай һығымта яһарға була:

- бер территорияла йәшәүсе бер халыҡтың шунсама ҡалаһы булыуы, һис шикһеҙ, уларҙың төп, йәғни баш ҡалаһы барлығын да аңлата;

- башҡорттарҙың берҙәм рәүештә 1152 йылда Ислам динен ҡабул итеүе уларҙың ойошоп йәшәүе, бер ханға (батшаға) буйһоноуын да белдәрә;

- тимәк, баш ҡала - Башҡорт булып сыға һәм ул ҡалған 69 ҡаланың үҙәге һаналған була.

Ошоларҙан сығып ҡына ла, әлеге Өфөлә табылған Өфө-II ҡаласығын Европа ғалимдары урта быуаттарҙа үҙ карталарында билдәләгән Башҡорт ҡалаһы тип атарға тулы нигеҙ бар. Халыҡтың үҙенең тарихи хәтеренән дә аныҡыраҡ һәм ышаныслыраҡ дәлил юҡ донъяла. Йәғни, башҡорттарҙың берҙәм рәүештә мосолман динен ҡабул итеүе уның бер етәкселеккә буйһоноп, бер үк сәйәси, иҡтисади һәм мәҙәни мөхиттә йәшәүен, тимәк, дәүләтселеге булыуын раҫлай. Ул осорҙа дәүләтселегебеҙ, уның үҙәге - баш ҡалаһы булмаһа, үҙенең тышҡы һәм эске азатлығын иң беренсе урынға ҡуйып йәшәгән халыҡ вәкилдәрен бер юлы Ислам диненә йәлеп итеү мөмкин дә булмаҫ ине. Сөнки башҡорттарҙың барыһы ла Исламды ирекле рәүештә ҡабул итмәгән, уны индереү өсөн генә түгел, хатта ҡабул итеү өсөн дә дәүләтселек кимәлендәге механизм кәрәк булған. Шул уҡ ваҡытта боронғо Өфө бер нисә сауҙа юлының киҫешкән урынында ултырған. Билдәле тарихсы Вахрушин яҙыуынса, Себер менән Урта Азияны сауҙа менән тоташтырыусы юл Өфө аша үткән. Ә бит сауҙа - ҡаланың төп күрһәткестәренең береһе иҫәпләнә.

**Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институты директоры, тарих фәндәре докторы Н. МАКАРОВ:** "Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының саҡырыуы буйынса Рәсәй Фәндәр академияһының археология институты хеҙмәткәрҙәре, тарих фәндәре докторҙары И. Л. Кызласов, Ш. Н. Әмиров, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина Өфө ҡалаһының Киров районында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы торошон һәм уны фәнни яҡтан өйрәнеү перспективаларын тикшереү өсөн Эксперт советы йыйылышында ҡатнашты.

Өфө ҡалаһының Пушкин һәм Воровский урамдары киҫелешендә урынлашҡан боронғо Өфө-II ҡаласығы хаҡында Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты ошоларҙы хәбәр итә:

1. 2006-2007 йылдарҙа боронғо ҡала урынлашҡан территорияның көньяҡ майҙанында алып барылған археологик ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә табылған мәҙәни ҡатлам фән тарафынан етди өйрәнеүҙе талап итә. Мәҙәни ҡатламдың 4 метрғаса етеүе уны Көнсығыш Европала булған башҡа ҡомартҡыларҙан айырып тора. Кешенең был территорияла даими йәшәүе мәҙәни ҡатламдарҙың эҙмә-эҙлекле урынлашыуы менән иҫбатлана (беҙҙең эраға тиклем I-II быуаттар). Боронғо ҡаланың һаҡланып ҡалған стратиграфияһы хронологик этаптарҙы, ҡаласыҡтағы йорттарҙың планын, оборона системаһын теп-теүәл итеп билдәләргә мөмкинлек бирә.

2. 2007 йылда алып барылған археологик ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә табылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына инә. Боронғо ҡаланың оборона стеналары ҡомартҡының тәүге көндәренән үк алдан әҙерләнгән проект буйынса төҙөлгән һәм бында ҡасандыр үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булғанлығын дәлилләй. Стена төҙөүҙә ҡулланылған балсыҡ массаларынан тыш, ағас конструкциялар ҙа яҡшы һаҡланған һәм улар архитектур-төҙөлөш деталдәрен дөрөҫ күҙалларға ярҙам итә.

3. Ҡаҙыныу эштәре ваҡытында табылған археологик коллекцияла төҫлө, ҡиммәтле, төҫлө һәм ҡара металдан яһалған әйберҙәр, һөйәктәр, быяла, аҫыл таштар, балсыҡ әйберҙәр бар. Беҙҙең эраның IV быуатынан алып XV быуатҡа тиклем йәшәгән Урал-Волга буйы төбәге халҡы өсөн хас булған һауыт-һаба менән бер рәттән, Урта Азия, Кавказ һәм башҡа яҡтарҙың һауыт-һабаһы өлгөләре лә табылған. Быяла һәм ярымҡиммәтле таштарҙан яһалған әйберҙәр Византия һәм Прибалтика территориялары менән булған бәйләнештәр тураһында һөйләй. Иртә һәм үҫешкән Урта быуаттарға ҡараған бик күп алтын, көмөш ювелир әйберҙәр һәм кейем деталдәре (алҡалар, ҡайыш биҙәүестәре), шулай уҡ Алтын Урҙа, иртә Византия ваҡытына ҡараған тимер аҡсалар табылған. Ҡалала алтын менән эш итеү буйынса махсуслашҡан ювелир эшмәкәрлек үҫешкән булған. Һөйәктән төрлө әйберҙәр эшләү ҙә бик киң таралған күренештәрҙең береһе һаналған. Өфө-II боронғо ҡаласығы ҡәберлек менән берҙәм археологик комплексты тәшкил итә.

Шулай итеп, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты беҙҙең эраның IV-XV/XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтен билдәләй. Өфө-II ҡаласығы быуаттар буйына йәшәп килгән ҙур административ, сауҙа үҙәктәренең һәм Урал-Волга буйы тарихының әһәмиәтле пункттарының береһе һанала. Мәҙәни ҡатламдың һәм органик материалдың яҡшы һаҡланыуы Урта быуаттарға ҡараған урындағы тарихи процесты яҡшы күҙалларға мөмкинлек бирә.

Боронғо ҡаласыҡтың фәнни әһәмиәте шунда: ул Башҡортостандың һәм Көньяҡ Уралдың яҙма тарихҡа тиклемге иң ҡиммәтле тарихи сығанаҡтары иҫәбенә инә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламын ныҡлы һәм комплекслы өйрәнеү Өфө-II ҡаласығын Рәсәй археология фәненең эталонлы объектына әүерелдерәсәк, тип иҫәпләргә бөтөн нигеҙ бар.

Шул уҡ ваҡытта Өфө-II ҡаласығы юғары ҡатмарлылыҡ категорияһындағы археологик объекттарҙан һанала һәм археологик ҡаҙыныу эштәрен тиҙ арала ғына тамамлау мөмкинлеге юҡ. Өҫтәүенә, Өфө-II археологик ҡомартҡыһы үҙенсәлекле юридик статусҡа эйә - ул региональ әһәмиәттәге ҡомартҡы (Башҡортостан Республикаһының Юғары Совет президиумы Указы - 12.05.1992 йыл). "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫ объекттары (тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары) тураһында"ғы Федераль законға ярашлы, бындай категориялы объекттар дәүләт тарафынан һаҡланырға тейеш. Археологик объекттар - боронғо заман ҡомартҡылары, улар дәүләт милке һанала һәм милли фондты тәшкил итә.

Алда әйтеп үтелгәндәрҙән сығып, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә һәм Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһына ошо мәсьәләләрҙе ҡарарға тәҡдим итә:

1. Археология ҡомартҡыһын - IV-XVI быуаттарға ҡараған Өфө-II ҡаласығын төҙөлөш һәм башҡа хужалыҡ эштәре территорияһынан сығарыу, шулай уҡ мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау зонаһы проектын эшләү, ҡаласыҡтың һаҡланыуын тәьмин итеү маҡсатында, айырым көйләнеүсе ҡала төҙөлөшө эшмәкәрлеге объекты булараҡ, мәҙәни мираҫ объекты территорияһы сиктәрен билдәләү.

2. Өфө-II ҡаласығын музей элементтары менән туристик маҡсаттарҙа файҙаланыу өсөн архитектура-терәк проекты планы, ер участкаһының планлаштырыу схемаһын эшләп сығарыу.

3. Археология белгестәренең көсөн Өфө-II ҡаласығын планлы, бөтә яҡлап һәм комплекслы өйрәнеүгә йүнәлтеү һәм ҡомартҡы базаһында тәбиғи-фәнни дисциплиналар ҡатнашлығында халыҡ-ара экспедиция ойоштороу.

Заманса ҡаланың үҙәгендә ошондай бик яҡшы һаҡланғанлығы, асыҡ рельефе менән айырылып торған ҡомартҡы булыуы Өфө ҡалаһын Рәсәйҙең иң төп тарихи ҡалалары иҫәбенә индерә".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Япониянын Архитектура Институты вице-президенты, тарих фәндәре докторы Риичи Мияке: "Башҡорт ҡалаһы һәм Өфө территорияһында уның менән бәйле тарихи-археологик ҡомартҡылар башҡорт халҡының ғына милли байлығы түгел, ә бөтөн Дала Евразияһы ҡәүемдәренең, иң элек, төрки халыҡтарының уртаҡ хазинаһы. Монументаль архитектура объекттарын һаҡлау, консервациялау, тергеҙеү йәһәтенән ул дәүләттең һаҡсыл мөнәсәбәтенә лайыҡ, уның базаһында тарихи-мәҙәни ҡурсаулыҡ, Башҡорт-Өфө ҡалаһының тарихи музейын булдырыу фарыз", - ти. Көньяҡ Уралда тарихи әһәмиәте буйынса Өфөгә тиң булған башҡа Урта быуат археологик ҡомартҡыһы юҡ, ти башҡа ғалимдар ҙа. Был йәһәттән уны боронғолоғо археологик һәм яҙма сығанаҡтарға нигеҙләнеп раҫланған Мәскәү, Новгород, Киев, Ташкент ҡалалары менән генә сағыштырырға мөмкин. Эйе, нимәлер раҫларға, иҫбатларға ла түгел бында археолог-тарихсыларға. Барыһы ла раҫланған. Улар - рус һәм сит ил тарихсы-сәйәхәтселәре материалдарында, карталарҙа аҡҡа ҡара менән яҙылған. Шуларҙы раҫлаусы, быуаттар күмеп ҡуйған тарихты соҡоп сығарыусы ғына беҙҙең заман тарихсылары. Улар ҡулында ла хәҙер байтаҡ материалдар, уларҙы нығытыусы ҡомартҡы әйберҙәр етерлек. Тик ни өсөн беҙ, дәлилдәр, иҫбатлауҙар була тороп, хәҡиҡәти һүҙ әйтеүҙе ошоға тиклем һуҙҙыҡ? Бына шуныһы ғына ғәжәп...**

**✓ Хәҙер яҙыусылар бер-береһен белмәйҙәр ҙә. Осрашып һөйләшә лә алмайҙар. Тарҡау йәшәү ижади кешеләр өсөн үҙе бер фажиғә, минеңсә. Шуның өсөн дә Яҙыусылар союзы ошо бәйләнештәрҙе нығытыу буйынса дөрөҫ йүнәлеш алды.**



ӘҘИП ҺҮҘЕ

# ТАРҠАУЛЫҠ...

## ижад кешеләре өсөн үҙе бер фажиғә

**Әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин менән ҡыҫҡаса әңгәмәбеҙ бөгөнгө яҙыусылар донъяһы, әҙәби тәнҡит зарурлығы тураһында булыр.**

**► Өлкән яҙыусы булараҡ, һеҙ элекке яҙыусы менән бөгөнгө яҙыусыны сағыштыра, ниндәйҙәр һығымталар яһай алаһығыҙҙыр...**

- Яҙыусылар союзының бөтөн тарихы тиерлек минең күҙ алдымда үтте инде. Яҙыусылар союзына 80 йыл, ә мин унан "өлкәнерәк" - минә 84 йәш. 50-се йылдар баштарынан алып мин ошо ойошма менән тығыҙ бәйләнгәнмен. 1954 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзының II съезы үткәйне. Шунан башлап, мин бөтөн съездарҙа ҡатнаштым, уның бөтөн етәкселәре менән, һәр төрлө үҙгәрештәр менән таныш булдым. Элеккегә ҡараш ташлап, нимә әйтергә буламы? Элеккенең яҡшы яҡтары әлегелай минең хәтеремдә: ул ваҡытта яҙыусылар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә, бер-береһенә яҡын булып йәшәй ине. Был - беренсеһән. Икенсенән - ул ваҡытта яҙыусылар һаны күп түгел ине. Мин Яҙыусылар союзына ағза булып ингән ваҡытта, 1959 йылда, 47 яҙыусы ағза булып тора ине. Хәҙер - 250. Һан яғынан үҙгәреште билдәләмәй булмай. Шуның өсөн элек ойошма ыҡсымлыраҡ булғандыр. Унда ижади һөйләшеүҙәр, йыйылыштар йыш үткәрелә ине. Партия йыйылышымы ул, профсоюз йыйылышымы, йә булмаһа, секциялар буйынса, жанрҙар буйынса бик һәйбәт һөйләшеүҙәрме - барыһы ла юғары кимәлдә үтә ине. Был ижади бәйләнеш, яҙыусыларҙың үҙ-ара тығыҙ аралашыуы, үҙ-ара фекер алышыуы, ҡатнашып йәшәүе, бер яҡтан, беҙҙең әҙәбиәттең шул ваҡыттағы кимәлен билдәләй. Кимәлен билдәләп кенә ҡалмай, ә әҙиптәргә яҡшыраҡ әҫәрҙәр яҙыуға ярҙам итеүсе лә булып тора.

Хәҙер яҙыусылар бер-береһен белмәйҙәр ҙә. Осрашып һөйләшә лә алмайҙар. Айырым, тарҡау йәшәү ижади кешеләр өсөн үҙе бер фажиғә, минеңсә. Минең дә ҡайҙа, кемгә барайым, кем менән ижад тураһында һөйләшәйем икән, тип уйланған саҡтарым булғылай. Шундай мәлдәрҙә, гәҙиттә, "Ағиҙел" журналына барып сығам. Унда күберәк эш тураһында һөйләшәһең, һорашаһың - ҙур ижади һөйләшеү барыбер килеп сыҡмай. Гәзиткә, йә нәшриәткә барһаң, ижад темаһына әңгәмәләшерлек кеше табып булмай. Был беҙҙең әҙәбиәттең дә, йәмғиәттең дә хәҙерге ваҡыттағы үҙенә күрә бер фажиғәһе. Бигерәк тә был йәштәр өсөн ҡурҡыныс. Шуның өсөн дә беҙҙең Яҙыусылар союзы бик һәйбәт кенә эштәр башлап тора - ошо бәйләнештәрҙе нығытыу буйынса дөрөҫ йүнәлеш алды, тип ҡыуанабыҙ. Яҙыусылар союзының күберәк ижади кимәлдә һөйләшеүҙәр, һәр төрлө фекер алышыуҙар үткәреү өсөн йыйылыштар, кәңәшмәләр, конференциялар йыйырға, тигән планы бар. Әгәр ул пландары барып сыҡһа, бик һәйбәт булыр ине.

**► Әҙәбиәттең кимәлен тәнҡитселәр ҙә билдәләй торғандыр. Хәҙер тәнҡитселәр юҡ, тигән фекер йыш ишетелә. Ә бит шул уҡ совет осоронда башҡорт әҙәбиәтендә тәнҡитселәр әүҙем эшләгән...**

- Ғөмүмән, әҙәбиәт фәне тигән төшөнсә бар. Мәҫәлән, бигерәк тә теге быуаттың 60-70-се йылдарында беҙҙең әҙәбиәт фәне ҙур үҫеш алды. Ул ваҡытта беҙҙең күренекле әҙәбиәт белгестәребеҙ бар ине. Шул уҡ Әхнәф Харис үҙе генә ни тора! Ниндәй асыштар яһаған кеше! Ниндәй ҙур шәхес, әҙәбиәт белгесе! Йәшерәктәргә килгәндә, Ғайса Хөсәйенов шиғриәт тураһында күпме хеҙмәттәр яҙҙы. Унан һуң Ғайса Батыргәрәй улы күпме документаль әҫәрҙәр яҙған кеше. Уның тикшеренеүсе, ғалим булараҡ эшләүе айырым игтибарға лайыҡ. Миҙхәт Ғәйнуллин драматургия тураһында китаптар сығарып, талымһыҙ эшләне. Һәр жанр буйынса Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов кеүек күренекле ғалимдар бар ине. Хәҙер мин ошо кимәлдәге ғалимдарҙы күрмәйем. Ә ундай белгестәр, ысынлап та, бик кәрәк. Әҫәрҙәргә ваҡытында баһа биреү, халыҡҡа еткереү, уларҙың мәғәнәһен асыу һәм башҡалар - әҙәбиәт өсөн бик мөһим.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# КӨСӨҢ ЕТМӘҪТӘЙҘЕ...

## Хоҙайға тапшыр, тиҙәр

**"Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, күп шиғри йыйынтыҡтар авторы Гөлназ Ҡотоеваны уҡыусы менән таныштырып тороу кәрәкмәйҙер. Уның инде күптән үҙ уҡыусылары, үҙ мөхите бар. Яҙыусыларға бирелә торған өс һорауҙы беҙ уға ла төбәнек. Уның яуаптарын гәзит уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итәбеҙ.**



**➔ Гөлназ, һинең ижадыңа моңһоулыҡ һәм ниндәйҙер юғары аң менән аралашыу формаһы хас. Был һинең күңел торошоңмо, әллә...**

- Ижадсының көсө тормошто ҡоштар юғарылығынан байҡай, алдан күрә белеүендә, күренештәрҙе тәфсирләп өйрәнеүендә, һығымталар яһай белеүендәләр. Фани донъяла бер нәмә лә мәңгелек түгеллеген аңлап йәшәйем. Шул ижадымда ла сағылыш табалыр. Сама, алтын урталыҡты тоя һәм таба белеү - үҙе бер бәхеттер. Йәшерәк саҡта гел күҙҙәрем дымланып, иларға ғына тора инем. Хәҙер ҙә күңел нескә ул. Тик үҙемде тиҙ генә ҡулға алып, артыҡ тулҡынланмаҫҡа, барыһын да кисерергә һәм үтергә тейешле итеп ҡабул итәм. Хоҙайға тапшыр, тиҙәр, үҙеңдең көсөңдән килмәҫтәй, хәл ителмәҫтәй мәсьәләләрҙә. Нығыныуымда тормошта, ғүмер юлымда терәк булған туғандарымдан, ижадсы дуҫтарымдан башҡа, әҙәбиәтебеҙ, халҡыбыҙҙың аҡылы, тотҡан динебеҙ ҙур терәк. "Күңеләнде һағыштарҙан арала", тип юҡҡа йырланмай йырҙа ла. Юҡҡа ҡул ҡаушырып ултырыу, моңһоуланыу ярамай. Әммә күңел бит ул шағирҙың көйлә ҡоралы. Ҡай саҡ юҡтан ғына ҡыйрала, көйһеҙләнә лә ҡуя. Шундай ваҡыттарҙа күңелде урынына ултыртып, төҙәкләнеп алыу өсөн ваҡыт, аҡыл, йөрәк көсө кәрәк.

Һәр ваҡыт аҡыллы кешеләргә һоҡланам. Уларҙың кәйефе тигеҙ, барыһы ла урынында, һәр һорауға яуабы бар. Әммә гел генә аҡыл менән йәшәү күңелһеҙерәк булыр ине. Шуғамылыр, күңелде тыңлап, ҡайһы ваҡыт үҙем теләгәнсә, йөрәк ҡушҡан аҙымдар яһала - был да артабан донъяны, кешеләрҙе танып белеүемдә яңы офоҡтар, яңы ишектәр аса. Үткән эшкә үкенергә яратмайым. Хаталанғанмын икән, шуны танып, йәнә алға ынтылып, киләсәккә өмөт, хыялдар менән йәшәүҙе өҫтөн күрәм.

**➔ Бөгөн йәштәр китап, шул иҫәптән шиғыр уҡымай, тиҙәр. Һин ниндәй итеп күрәһең үҫеп килгән йәмғиәтте?**

- Йәштәр үҙ заманын борсоған һорауҙарға яуап биреүсе әҙәбиәтте һайлайҙыр, тием. Уҡымайҙар, тип әҙә һуға алмайым. Классик әҙәбиәт, алтын фондты тәшкил иткән әҫәрҙәр уҡыла ул. Китапҡа оҙаҡ итеп текләп ултырмаһалар ҙа, әҙәбиәт тормошҡа ныҡлабыраҡ үтеп ингән заман хәҙер. Аудиокитаптар, киноға төшөрөлгән әҫәрҙәр аша ла таныш улар әҙәбиәт менән. Үҙебеҙҙә әүҙемерәк булырға, интернет киңлектәрен алтынға бәрәбәр өлгөләр менән тултырырға кем ҡамасаулай? Балалар беҙҙең сағылышыбыҙ. Беҙ нимә менән мауығабыҙ, улар ҙа шуны ҡыҙыҡһынып ҡарай. Үҙебеҙ шиғыр яратмаһаҡ, балалар уны нисек яратырға тейеш?

Шиғырҙы ҡабат уҡымаҫтар тип уйлаһаң, ҡулыңдан ҡәләмең төшәр. Һүҙ һәр ваҡыт кәрәк. Шиғри һүҙ айырыуса. Сәпкә тейҙерер, күңел төпкөлдәрен аҡтарып һалыр, аһ иттерер шиғри һүҙ.

Һуңғы ваҡытта рифмалаған һәр кемде шағир тип атауҙары күптәрҙе борсоуға һала. Быға көйөнөргә кәрәкмәй. Ваҡыт елгәрә, иләй, әүәләй ул. Рифмалаусы үҙе лә тойоуы мөмкин һүҙе үтемһеҙ булыуын, тоймағанда ла асыҡ белдереп ҡуйыусандар. Бейей-бейей оҫтарған бейеүсе кеүек, йәш кеше рифмалап башлаһа, яйлап тәрән һәм тос фекерләргә лә өйрәнеүе мөмкин. Шағир булып етешеү - ул шәхес өлгәрөүе. Һүҙҙәрҙең артында шәхес юҡ икән, тимәк, шиғриәт тә юҡ.

**➔ Йәшәү нисек кенә ҡатмарлы, тормош тығыҙ булғанда ла һөйөүгә урын табыла кеүек. Ә һиндә?**

- Һөйөү минең өсөн тыныс атҡан алһыу офоҡло таң, улымдың күҙҙәре, туғандарымдың иҫән-һау булыуы, яратҡан эшем, хеҙмәттәштәрем, арып ҡайтып инергә үҙ донъям, ижадта үҙемдең ялҡынымды, йәшәү һутымды сығара алыуым. Матур күңелле кешеләр менән осрашыуҙар, аралашыуҙар, сәйәхәттәр... Мөғжизәле донъя асҡан киң ҡолас. Ошо донъяла үҙеңде өйрәнеү, эске тауышыңды тыңлай белеү һәм намыҫың, йөрәгең ҡушҡанса йәшәү, бирелгәндең ҡәҙерен аңлау... Тормошто ратыу, барыһын да булдырған, тәртиптә тотҡан илаһи көскә - Хоҙайға рәхмәтле булыу үҙе мөхәббәт. Тормошто яратҡан, үҙен ҡабул иткән генә башҡаның Йыһанын һыйҙыра алалыр.

Әҙәм балаһына һөйөү тормошто йәмләр, уны нығыраҡ тойор, кешеләрҙе аңлар өсөн биреләләр. Һөйә белгән йөрәк кенә, тетрәнеүҙәр аша үтеп, аңдың юғарыраҡ баҫҡысына күтәрелергә һәләтлеләр. Яратып һәм яратылып йәшәйем! Шөкөр тиергә кәрәк. Ә тормош ҡасан ҡатмарлы булманы икән? Ваҡыт ҡына йүгәндәрен һыпырып ҡаскан ат һымаҡ, әллә ҡайҙа ашығып саба ла саба. Күңел йылыһын өләшеп, мөмкинлектәребеҙҙе асып һәм донъяға үҙебеҙ асылып, хәлебеҙсә изгелектәр ҡылып өлгөрһәк ине.

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ҮЛТЕРГӘН ДӘ - ҺҮҘ...



**Гәзиттең 29-30-сы һандарында йәш прозаик Миләүшә Ҡаһарманованың "Саҡ менән Суҡ" хикәйәһен уҡып сыҡтым. Әҫәрҙең уҡыусыға тәьҫир көсө шул тиклем юғары, унда барған ваҡиға юҫығы оҙаҡ ваҡыт һине үҙенән ысҡындырмай, тәрән уйҙарға һала. Ошо уҡ авторҙың былтыр "Ағиҙел" журналының 12-се һанында баҫылған "Сәләм" хикәйәһен уҡып сыҡҡас та, шундай уҡ тойғолар кисергәйнем.**

Егерме биш ил яҙыусылары ҡатнашҡан Мәхмүт Ҡашғари исемендәге Халыҡ-ара хикәйәләр ярышында Миләүшәнең шул "Сәләм" хикәйәһе 2-се урынға лайыҡ булғайны. Уның сюжеты ябай ғына. Эскелеккә бирелеп, тормош төпкөлөнә тәгәрәй барған, ҡала ятағында йәшәп, урам һеперәүсе булып эшләп йөрөгән Хәмдиәгә йәшлек мөхәббәте Раймандан сәләм еткерәләр. Һөҙөмтә көткәндән күпкә юғарыраҡ булып сыға: Хәмдиә күҙ менән ҡаш араһында, барса кешеләрҙе ғәжәпләндереү ҡатыш аптыратып, күңел балҡыу кисерә һәм кинәт үҙгәрә, тормошо ыңғай йүнәлеш ала. Уның үҙ-үҙен тотошо, кейенеүе, фекерләүе үҙгәрә, икенсе йәшлеген кисереп, Раймандыкөтөргә тотона. Автор был хикәйәһендә әйтелгән сәләм һүҙенең генә кешегә ни тиклем тәьҫир итеүен, тормошон балҡыта алыуын һүрәтләй. Сәләм һүҙе Хәмдиәнең киләсәккә маҡсатын барлыҡҡа килтерә, күңелендә өмөт усағы тоҡандыра.

Гәзиттә донъя күргән "Саҡ менән Суҡ" хикәйәһе инде "Сәләм"дең нәҡ киреһе, йәғни, һүҙҙең кеше тормошон емерткес тәьҫире хаҡында. Игеҙәктәр Кәбир менән Кәримде әсәләре тыуғандарынан алып бер туҡтауһыҙ "ҡороғорлар", "йәлсемәгерләр", "дөмөккөрләр", "сәсрәп киткерләр" тип ҡарғай. Малайҙар сабый саҡтарынан уҡ бик ҡулсыр, тыңлауһыҙ булып үҫә, мәктәптә уҡығандарында ла хаяһыҙ шаярып, әллә нисә тапҡыр тәртип боҙоп, шуның язаһын алып, һуңынан икеһе бер ҡыҙға талашып, һуғышып китәләр. Һөҙөмтәлә Кәрим рәшәткә артына барып эләгә, башына игеҙәге сүкеш менән һуҡҡандан һуң Кәбир хәтере лә, аҡылы ла тарҡалып, ғүмерлеккә инвалид коляскаһына ултыра. Улар, төрки халыҡтар риүәйәт-бәйетендә әйтелгәнсә, әсәләренең ҡарғышына тарып, Саҡ менән Суҡҡа әүерелә, йәғни яҙмыш уларҙы мәңгелеккә айыра.

Бөрйән районының боронғо, ырыҫлы бөрйән ырыуы мөхитендә үҫкән, шул төбәктән үҙенә ижади башланғыс алған Миләүшәнең хикәйәләренең тәьҫир көсө, уңышлы булыуы нәҡ шул һүҙ, тел, лөғәт үҙенсәлегенә барып ялғана ла инде. "Үлтергән дә - һүҙ, терелткән дә - һүҙ" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Хәҙерге уҡыусыны сюжет киҫкенлеге, ваҡиға сағыулығы менән әллә ни үҙеңә йәлеп итеп

*✓ Телсән генә инәйҙең улын ниндәйҙер бәлә менән төрмәгә ултыртып ҡуялар. Әсә кеше улына аҡлау эҙләпме, әллә үҙен тынысландырыу өсөнмө: "Ярай, ҡалайтаһың, Ленин бабай ҙа ултырған бит", - тип ҡуйған.*



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




**Уйлап ҡараһаң, халыҡ араһында күпме мәрәкә, лаҡап йөрөй. Һәм уларҙың һәр береһенә бер тарих бәйләнгән. Булғанында бер көлөп, аҙаҡ һөйләп, хәтерләп көлөп йөрөй халыҡ. Лаҡаптар, гәҙәттә, тапҡыр кешеләр теленән сыға. Беҙҙең яҡта бер егетте атаһы: "Ауылға ғына ҡайтып йәшәмәй, ҡалаҡда асҡа ҡаҡланып йөрөйһөң шунда", - тип әрләй икән. Шунда егетең: "Ас булһам да, асфальттан йөрөйөм", - тигән ти. Хәҙер йыш ҡына студенттар шулай тип ҡабатлай.**

### "Бапаҡтар"

Әхмәр ауылында тотош бер ғаилә уландарын "бапаҡтар" тип йөрөтәләр. Бәҡтиһән, өлкән ағалары мәктәпкә барғанда алфавиттың нимә икәнен дә белмәй барған икән. Хәрефтәр теҙмәһенә оҙаҡ ҡына ҡарап торғас, "ж" хәрефенә төртөп күрһәтеп, "бапаҡ" тигән. Унан был атама үҙенә генә түгел, тотош ғаиләһенә, унан "бапаҡ балаһы" булып балаларына ла йәбешкән. Бәлки, "бапаҡ ейәндәре" лә булыр әле.

### "Нидастуйын..."

Моҡаста бер инәй телефондағы "Абонент не доступен" тигәнде үҙенсә аңлап, "Ҡыҙыма шылтыратһам, "нидастуйын" тип тораһы, нишләп минең ҡыҙым нидастуйын булһын, хатта дастуйын", тип көйә икән. Хәҙер кемдер "не доступен" булғанда, был да нидастуйын тип көләбеҙ.

### "Күҙе нимәгә!"

Бөрйән ауылдарының береһендә өйләнмәй йөрөгән бер егеткә, димләп, кәләш алып бирәләр. Йәш килен егәрле, тыйнаҡ булып, иренә лә, туғандарына ла оҡшаған. Тик энерҙә күҙе насар күрә икән. Бер көн күрше ағай йәш килендең һауын һыйырын эҙләп, мал араһында ҡаңғырып йөрөгәнен ҡарап торған да, теге егеткә: "Ҡатыныңдың күҙе күрмәй түгелме?"- тигән. Егет быны ғәйеп эҙләү тип уйлапмы: "Уның күҙе минә нимәгә?"- тип яуаплаған. Хәҙер берәйһенең етешһеҙлеген тикшергәндә, "Ярай, уға күҙ нимәгә?" тип ҡуялар.

### "Йөнлө бала"

Бер ғаиләлә баланың арҡаһы, яурындары йөн менән ҡапланып тыуған. Бындайҙың булыу мөмкинлеген һәм тиҙҙән ҡойолоп бөтәрөн белмәгән, күрһәң, ата менән әсә. Балаһына аптырап ҡарап торған йәш атай ҡатынына: "Әллә гәзит тоҡандырып, иплап кенә өтөп ҡарайым микән", - тигән ти. Шунан алып беҙҙең яҡта яңы тыуған сабыйҙы ҡарағанда йәш атаәсәне: "Баланың бөпкә йөнөн өтөп ҡуймағыҙ", - тип шаярталар.

### "Ҡабаланғанда..."

Бер апай туғыҙынсымы, унынсымы балаһын тыуҙыра икән. Уның хәлен белергә ингән күршеһе был хаҡта йүгереп барып фельдшерға әйткән. Ул заманда баланы өйҙә тапҡандар әле, фельдшерҙар ҙа яңы ғына эшләй башлаған булған. Ҡатындар бала табыр ваҡыт етһә лә, фельдшерға мөрәжәғәт итеп тормаған, шуға ла теҙеһе ауырлыҡтарҙы һағалап йөрөр булған. Фельдшер тиҙ генә килеп етеп, был апайҙың балаһын ҡабул итеп, бәпесте үлсәп, әйләндереп-тулғандырып тикшереп, ваҡытты һүҙып ташлаған. Ә апайҙың ире өмә яһатып йөрөй, хәҙер ашарға ҡайтырға тейештәр икән. Апай яңы тыуған сабыйын ситкә һалып тороп, тиҙ генә эштәрен тамамлайым тиһә, фельдшер ҡыҙ уны урынында ятып торорға ҡуша, тейешле тәртиптәрҙе үтәтеп булаша, ти. Аҙаҡ апай ҡоҙоҡ буйында фельдшерҙы: "Ҡабаланғанда анаһы йөрөй бала таптырып", - тип әрләп тора, ти. Шул тирә халҡында ҡабаланғанда берәй көтөлмәгән эш килеп сыҡһа, "Ҡабаланғанда, йөрөй шунда бала таптырып" тигән лаҡапты ҡабатлайҙар.

### "Шәпәй һиңә айыу түгел"

Бер солоҡсо әбей менән бабайҙың йәйләүенә айыу эйәләгән. Икәүләшеп дөңгөр менән ҡурҡытып ҡыуалар икән. Бер ваҡыт айыу ҡапыл әбейҙең ҡаршыһына килеп сыҡҡан да, артҡы аяҡтарына баҫып, һуғырға ынтылған кеүек хәрәкәттәр яһап һелтәнгән һәм кире ҡасып киткән. Был ваҡыт бабай ситтәрәк торған һәм айыу әбейенә һуҡҡан икән тип, ҡото осҡан. Ҡараһа, әбейе ағас төбөндә ҡатҡан да ҡалған, ти. Аҙаҡ бабай: "Әбейҙе лә йыға һуғалманы ул айыу", - тип һөйләгән һәм бер саҡ эсеп иҫереп, әбейен һуғып ебәргән һәм: "Шәпәй һиңә айыу түгел, һуҡһа, йыға һуға", - тигән, тиҙәр. Берәй ирҙең ажарлығын самалағанда: "Ул һиңә айыу түгел, йыға һуғырға может", - тип ҡуялар.

### "Ленин да ултырған..."

Телсән генә инәйҙең улын ниндәйҙер бәлә менән төрмәгә ултыртып ҡуялар. Әсә кеше улына аҡлау эҙләпме, әллә үҙен тынысландырыу өсөнмө: "Ярай, ҡалайтаһың, Ленин бабай ҙа ултырған бит", - тип ҡуйған. Берәйһенең шундай хәлгә тарыуын ишеткәндә, уйынлы-ысынлы шулай тиҙәр.

### "Үтеп китә алам икән..."

Ир менән ҡатын урманда ятып бесән эшләгән икән. Бер көн таңға яҡын эргәлә генә айыу үкергән. Былар ҡурҡышып, күрше бесәнселәр яғына ҡарай йүгергән. Ир кеше йүгереп килә торғас, ҡатынын үтеп китеп, артта ҡалдырған, ти. Шулай йүгерешеп, күрше бесәнселәр ҡыуышына барып еткәндәр. Аҙаҡ ир, оялып, "Ҡараһам, бисәкәй хәтәр шәп йүгерә, туҡта, мин аны үтеп китә аламмы икән, тип, ҡыҙыҡғайным - үтеп китә алам булып сыҡты", - тигән булған, ти. Берәй нәмәнән ҡасҡанда йәки өлгөрәйем тип йүгерешкәндә "Үтәләм микән тиһәм, үтәләм икән", тип көләшәләр.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА,**
**Бөрйән районы.**

### "Ялы ла, ҡойроғо ла..."

Беҙҙең Таулыҡай ауылының үҙ "Хужа Насретдин"ы булды. Мортаҙа олатай күптән гүр эйәһе булһа ла, көләмәстәрен халыҡ һаман һөйләй әле. Тормош иптәшем мәктәптә уҡығанда олатай унда завхоз булып эшләгән. Йәй көнө мәктәптең атына уҡыусы малайҙар менән бесән эшләйҙәр икән. Малайҙар арып: "Олатай, ял итеп алайыҡ", - тиһәләр: "Әйҙә, ошо яланды күбәләп бөтәйек тә, унан ялы ла, ҡойроғо ла һеҙгә", - ти икән.

### Һорка ат шәп була

- Олатай, һинең Һорҡаң (ат исеме) шәп, - тиһәләр:
- Һеҙ ҙә атығыҙҙы һорға буяп алығыҙ, - тип яуаплаған.

### "Ай тотола!"

- Олатай, бөгөн ай тотола! - ти икән малайҙар.
- Тотолһа, урламаһын! - тип яуаплай тапҡыр ҡарт.

### Серек янбашлы ат

Һаҡмарға ат һуғарырға төшкән күрше малайын олатай: "Был ат сабан булды, ике янбашы серегән, һуғымға эшкинмәй", - тип мәрәкәләгән.

### "Етә ул..."

Мортаҙа олатайҙың бер күҙе зәғиф була. Үҙ хәленә бик аптырамай ғына: "Бер башҡа бер күҙ етә ул", - тип тапҡыр яуаплаған ул ҡыҙыҡһыныусыларға.

### "Таң атамы икән?"

Бесән өҫтө. Бер ҡыуышта бригадир Мортаҙа олатай, колхоз рәйесе Әхмәт ағай ҙа ҡуна ҡалған. Рәйес: "Мортаҙа ағай, таң атамы икән?" - тип һорай ти.
- Атҡанын ишетмәнем, - тип яуаплай икән олатай.
- Юҡ, таң беленәме икән тип һорайым, - тип ҡабатлай ти рәйес.
- Һәрмәп ҡараманым, беленә микән, юҡ микән, - тигән яуап булған.

### Утыны йыуанайған

Йыуан-йыуан утын бысып йөрөгән күршеһенә Мортаҙа олатай: "Утынды мин әбей менән нәҙек сағында уҡ бысып бөттөм, һинеке ята-ята йыуанайған", - тип мәрәкәләгән, ти.

### Дәүләткә - иген

Олатайҙың әбейенең исеме Дәүләтбикә ине. Өйө контора ҡаршыһында булғас, уның өйө эргәһендә "Дәүләткә фәләнсә тонна иген тапшырабыҙ" тигән лозунг эленеп тора. Бынан да үҙенсә ҡыҙыҡ табып, бабай әбейенә: "Әбей, беҙгә фәләнсә тонна иген алып киләләр, ҡайҙа ҡуйып бөтәрбеҙ икән?" - ти.

**Зифа ҒҮМӘРОВА.**
**Баймаҡ районы.**

---

булмайҙыр ҙа. Нимә генә тимә, беҙ хәҙер тәүлек әйләнәһенә 200-ләгән телеканал бер туҡтауһыҙ киҫкен сюжетлы фильмдар күрһәткән, телгән киҫкен сюжетлы фильмды интернеттан табып булырлыҡ мәғлүмәтле заманда йәшәйбеҙ. Миләүшәнең был хикәйәләре иһә халҡыбыҙҙың меңәр йылдар күңелендә туҡылған һүҙ ҡиммәте менән үҙенсәлекле, уңышлы, йөрәккә уйылырлыҡ. Унан ошондай уҡ бай йөкмәткеле, һутлы ләҙәтле, үҙенсәлекле яңғырашлы хикәйәләр, повестар, романдар көтөп ҡалабыҙ.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

# ИШМУЛЛАЛАР РУХЫ - УЛДАРЫНДА



**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 17-се һанында Хәйбулла районы Подольск ҡасабаһынан Риф Сәйфулла улы Дилмөхәмәтов менән "Ысын ҡурайсылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ" исемле әңгәмә донъя күргәс, ҡәләмгә тотонорға мәжбүр булдым. Был материалда милли музыка ҡоралыбыҙ - ҡурай эшләү, ҡурайҙа уйнау оҫталығы һәм ҡурайсыларыбыҙ тураһында күңелдә йылытырлыҡ һүҙҙәр әйтелгән. Мин дә мәшһүр ҡурайсыбыҙ, иҫ киткес шәхесебеҙ Ишмулла ағай менән нисек танышыуым тураһында һөйләгем килгәйне.**

Ишмулла ағайҙың бер нисә концертында булһам да, үҙе менән яҡындан аралашҡаным булманы. БДУ-ның математика факультетын тамамлағас, 1977 йылда Баймаҡ районы Темәс ауылына эшкә ҡайттым. Шул осорҙа ҡыш айҙарының береһендә Ишмулла Дилмөхәмәтовтың 50 йәшлек юбилейына арналған концерты менән Темәскә килде. Аңлауымса, ул Темәс балалар йортонда тәрбиәләнгән булырға тейеш. Темәс халҡы уны шул тиклем дәррәү алҡыштарға күмгәйне. Мәшһүр ҡурайсы менән яҡындан аралашырға, уның кәңәшен ишетергә тура килмәне миңә. Әммә был ваҡиғанан күпкә алдараҡ, студент сағымда, Юлай Гәйнетдинов мине бер егет менән таныштырҙы: "Миҙхәт, ҡара әле, беҙгә Ишмулла Дилмөхәмәтовтың яңы ғына әрменән ҡайтҡан улы килде", - тине. Көҙгәгә метр һикһәндән бейегерәк, яурынтаҡ, мөһәбәт кәүҙәле бер егет ине ул. Ул ятаҡта өҙҙөрөп ҡурай уйнаны. Ошо танышыуҙан һуң ике ай үттеме, юҡмы, ҡайғылы хәбәр ишеттек: егетте үҙҙәре йәшәгән Фрунзе урамындағы күп ҡатлы йорт алдында сәнсеп үлтергәндәр. "Йөрөп кенә киләм", тип сыҡҡан булған. Был фажиғәнән һуң нисә йыл үткән булғандыр, Ишмулла ағай үҙе лә фажиғәле һәләк булды. Ишмулла ағайҙың улы кинорежиссер булып, "Ырғыҙ" романын тулыһынса тулы метражлы фильм итеп эшләргә хыялланған. Был турала Төркмән ауылында йәшәгән Нәсимә Ахунйәнова тигән апай һөйләгәйне.

Ишмулла ағай менән, 1973 йылда булһа кәрәк, Салауат Юлаев ихтилалының 200 йыллығына арналған концертта республиканың бөтөн районларынан йыйылған 100 ҡурайсынан төҙөлгән ансамбль составында миңә лә уйнау бәхете тейҙе. Коллективты Белорет районынан сыҡҡан бик көслө ҡурайсы Абдулла ағай Хәлфетдинов етәкләне. Тәүҙә - Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында, унан һуң Башҡортостан Өлкә комитетында үткән ниндәйҙер бер кәңәшмәнең һуңынан сығыш яһаныҡ.

Ишмулла ағайҙың бер туған ҡустыһы Сәйфулла ағай менән Баймаҡта үткән халыҡ таланттары конкурсында таныштым. "Бына Сәйфулла Дилмөхәмәтов - Ишмулланың ҡустыһы", тип әйттеләр. Сәйфулла ағайҙы репетицияла тыңлап торҙом - бик шәп уйнай ине. Тәнәфестә бер аҙ һөйләшеп тә алдыҡ. "Ағайығыҙҙың Темәстәге бер концертында булдым, уны белә инем", - тиеүемдә ул бик ихлас ҡабул итте. Ихлас кеше ине Сәйфулла ағай. Гәзиттәге мәҡәләне күргәс, ошоларҙың барыһы ла иҫкә төштө. Сәйфулла ағайҙың улы Рифтең ҡурай эшләүе, ҡурайҙа үҙе лә уйнауы тураһында белгәс, Ишмуллалар тоҡомо дауам итә, тигән һөҙөмтәгә килдем.

**Миҙхәт ЗӘЙНУЛЛИН.**
**Ҡырмыҫҡалы районы.**

*✓ Һуңынан эләүкәгә тирем ағып төшкән урынды, ҡыҙыҡ өсөн типтер инде, еҫкәп ҡараным. Унан дегет тиһәң, дегет түгел, кәрәсиндекенә лә оҡшамаған, машинаның двигателенә ҡойоп эшкәртелеү үткән әсе май еҫе килә.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ТОҒРОЛОҒОНДО... пароль иҫбатлаймы?

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үҫмерҙәргә D витамины ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто ла яһамай, диабет хәүефен дә кәметмәй. Етмәһә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үҫмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины етешмәүе һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үҫмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", ти ғалимдар.

■ Ғалимдар иң хәүефле ауырыуҙар исемлеген төҙөгән. Беренсе урында Альцгеймер сире тора. Ул нервы системаһының етди тайпылышы менән бәйле. Белгестәр Альцгеймер ауырыуы менән сирләүселәрҙе ҡараусыларҙың сәләмәтлеген тикшергәндән һуң, ҡайһы бер осраҡтарҙа уның билдәләре уларға ла күсеүен асыҡлаған. Был кешеләрҙең араһында депрессия, стресҡа бирешеп барыусылар күп булыуы ла билдәләнгән.

■ "Өкө"ләр, йәғни әүҙемлеге төнгө сәғәттәргә тура килгән кешеләр йышыраҡ һимерә. Быға уларҙың төнөн ашауы ғына сәбәпсе түгел. Тикшеренеү барышында ғалимдар 3300 бала һәм өлкән кешенең сәләмәтлеге торошон күҙәткән. 1 сәғәт йоҡоһон юғалтҡан үҫмер тән массаһы индексына 2,1 берәмек өҫтәгән. Эксперттар билдәләүенсә, йоҡлау өсөн идеаль ваҡыт кискe 9-ҙан башланып, төнө буйы дауам итә. Шуға ла "өкө"ләргә лә ошо режимға яраҡлашырға тырышырға кәрәк.

■ Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе һаҡлау һәм нығытыу өсөн ирендe йә ҡатынынды социаль селтәрҙәрҙә дуҫтар исемлегенән алып ташларға кәрәк, ти ғалимдар. Килеп тыуған мәсьәләләрҙе лә күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеп хәл итеү күпкә уңышлыраҡ. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Йен Кернер, ҡатыны менән социаль селтәрҙәрҙә аралашмай башлағас, бер-береһен яҡшыраҡ аңлай башлауҙарын белдерә. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, ғаиләлә ир менән ҡатын персональ интернет-мәғлүмәттәрен йәшерергә тейеш түгел. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 56 проценты телефондың - пин кодын, социаль селтәрҙәрҙең һәм почтаның паролен белеү тоғролоҡ билдәһе булып тора икән.

■ Мичиган университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, балалар бәләкәй саҡта хис-тойғоларҙы айырырға өйрәнһә, өлкәнәйгәс, башҡаларҙы аңлауы еңелерәк була. Һынауҙарҙа аҙ тәьмин ителгән ике йәшкә тиклемге 89 бала ҡатнашҡан. Улар әсәләре менән бергә һүрәтле китаптар ҡараған. Китаптың сюжеты ябай һәм хистәргә бай: төп герой үҙенең көсөгөн юғалтҡан һәм аҙаҡтан уны тапҡан. Әсә ошо хистәрҙе бала үҙе кисергән ниндәйҙер ваҡиғаларға бәйләп аңлатырға тейеш булған. Йәғни, бала теге йәки был ситуацияны таный белһә, үҙен нисек торорға кәрәклеген дә беләсәк.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 4-се һабаҡ: "Яңынан йәшәй башларға"

Тәүбәгә килгәнемдең өсөнсө көнөндә апайымдар мунса яҡты. Тән һәм йән сафландырыуҙың был ләззәтле ысулын яҡын күрәм һәм һәр саҡ мунсаның иң беренсе быуына барырға яратам. Был юлы ла шулай иттем. Ҡыҙған табалай эләүкәгә менеп ҡунаҡланым да, ташҡа сүмес менән һыу һиптем. Элек ҡоро эҫе пар тәнемә килеп һуғылыу менән тирләй башлай, тәндән һыу бөртөксәләре атылып сыға торғайны. Ни ғәжәптер, был юлы тәүҙә өшөгән кеүек булып, тәнем тартышып алды, аҙаҡ маңлайым еүешләнде, шунан һуң ғына тирләй башланым. Миндеккә лә үрелмәнем, тын быуылғансы ултырам да, солансаға сығып һыуынып алам, тағы ла эләүкәгә менәм. Тәнемдән тир сығып бөткәнсе тиерлек шулай иттем, һуңынан эләүкәгә тирем ағып төшкән урынды, ҡыҙыҡ өсөн типтер инде, еҫкәп ҡараным. Унан дегет тиһәң, дегет түгел, кәрәсиндекенә лә оҡшамаған, машинаның двигателенә ҡойоп эшкәртелеү үткән әсе май еҫе килә. Артабан да ундай ҡара төҫтәге үтилләнгән "двигатель майы" йыл һуҙымында минең тәндән тир менән ҡуша сығасаҡ әле. Һуңынан наркологтарҙан һорашып белештем. Баҡтиһәң, араҡы составындағы эфир майы ашҡаҙанда эшкәртелмәйенсә, бөтөн тәнгә таралып, быуындарға, тире менән ит араларына, хатта елек һөйәгенең эсенә инеп тула икән.

Донъяла иң ҙур рәхәтлек кисереү тойғоһо нимә ул, тип һораһалар, мин, мунсанан сығыу, тип яуап бирер инем. Эҫеһенә түҙеү ауыр, ә сығыуы... Тап шул саҡта яңынан тыуғандай хис итәһең үҙеңде. Минең хәлдә бигерәк тә. Етмәһә, өс көн элек үлеп, яңынан тыуған кеше өсөн. Саҡ-саҡ ҡына йөрәктең өлпөлдәп тороуын иҫәпкә алмағанда, минән дә бәхетле кеше юҡ ине шикелле был донъяла. Һәр хәлдә, ҡотолғоһоҙ үлемдән ҡалған кеше, Хоҙай әмере менән тере ҡалһа, шулай уйлайҙыр. Мин ошоға тиклем кирегә бөткән атеист инем. Аллаһы Тәғәлә өс тапҡыр иҫкәртеү ебәреп, мине алып ҡалды, ул миңә үҙе килде. Ололарҙан ишетеп кенә белгән доғаларҙы уҡып йоҡлап киттем.

Дүртенсе көндә шаулап торған ҡалаға кире ҡайттым. Аяҡтарым асфальтты тойоу менән күңелгә был донъяны ятһыныу тойғоһо инеп урынлашты. Ҡала миңә шул тиклем яҡын, таныш ине, хәҙер алыҫ һәм ят. Кешеләре лә әллә нисектәр, сәйерҙәр. Бер кемгә лә иғтибар итмәҫкә, күтәрелеп ҡарамаҫҡа тырышып өйгә ҡайттым. Мин йәнемде ус эсенә алып, күтәрелеп сығып киткәндә буп-буш ҡалған фатирға йән ингән. Ауылға тип киткән улдарым әсәләре менән яңы ғына килеп төшөп, мәж киләләр. Улар менән иҫәнләшкәс, үҙемдең бүлмәгә үттем. Һәр саҡтағыса, бәләкәй улым йүгереп килеп инеп, миңә һырынды. Иң тәүҙә елкәмә менеп ултырҙы, аҙаҡ алдыма ятты. Уны үҙемсә яратып, иркәләнем, әммә күтәрелеп күҙҙәренә ҡарай алманым. Улым тегеләй итте, былай һырпаланды, ахыр, күңелем торошон аңлап булһа кәрәк, бүлмәмдән сығып китте.

Иртәгәһен эшкә барғас та, үҙемдең күптән өйрәнеп бөткән коллективым ят һымаҡ ине. Миңә ни булғандыр, берәүҙең дә күҙенә тура ҡарай алмайым, ҡарамағас, һөйләшергә һүҙ ҙә ялғанмай. Бер нисә дуҫыма, танышыма шылтыратырға уйланым да, кире һүрелдем. Хәйер, улар менән нимә тураһында һөйләшмәк кәрәк. Икенсенән, шылтыратыуым уларға сираттағы күңел асыуға сигнал ғына буласаҡ.

Күңелем буп-буш, дыңҡылдап торған мискә кеүек. Үҙем, гүйә, ярға ырғытылған балыҡ һымаҡмын. Балыҡ тигәндән, кире һыуға төшөүем - элеккесә күңел күтәрерлек йөҙ грамм инде. Тәүҙә йылғаның ситенә генә төшөп, сирҡаныс алаһың, аҙаҡ тубыҡтарға тиклем кисәһең, артабан бил тиңелтем... Ә минең хәлем шулай: ярҙа оҙаҡ ятһам, кибеп тонсоғорға тейешмен, шул уҡ ваҡытта кире һыуға ла төшә алмайым. Ярҙа ла ҡалырға тейеш түгелмен.

Рюмкаға үрелеп, йәғни ярҙан торған килеш кенә һыу алып ҡорғаҡһыған күңелде яҙыу тураһында хәҙер инде уйлап та бирмәйем. Эштәгеләр ҙә, өйҙәгеләр ҙә миндәге сәйер үҙгәреште тойоп алды. Айныҡ йөрөгәнемде күреп аптырайҙар ине булһа кәрәк. Һәр саҡ күңелле, юҡ ерҙән мәҙәк табып һөйләп йөрөгән кешенең балтаһы һыуға төшөүе уларға аңлашылып та бөтмәйҙер. Күңелгә шундай уй ҙа килде: әгәр ҙә улар минән төңөлөп, күптән ҡул һелтәгән булһа? Был бит ҡот осҡос минең өсөн.

Тимәк, миңә өр-яңынан йәшәй башларға, мөнәсәбәттәрҙе өр-яңынан ҡорорға, ҡалыптарҙы ватырға, ҡыҫҡаһы, тәпәй баҫҡан бала кеүек, бар нәмәгә яңынан өйрәнергә, һәр күренешкә айныҡ күҙ менән ҡарарға кәрәк. Башҡаса юл күрмәйем. Ярҙағы кибеп барған балыҡ кеүек, иртәнге ысыҡ төшкәнен көтәм.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ЙӨТКЕРӘҺЕҢМЕ, ТАМАҒЫҢ АУЫРТАМЫ?



● **Төнәтмә.** 300 мл ҡайнар һыуҙы керамик йә эмалле һауытҡа ҡойоп, туралған лимон һәм өс ҡалаҡ бал һалырға. Шуға түбәндә тәҡдим ителгән шифалы үләндәрҙең береһен 1 ҡалаҡ күләмендә ҡушырға: ваҡ итеп тураҡланған шалфей (баш ауыртыуын баҫыр); үткәргестән үткәрелгән 3-4 сантиметрлыҡ киптерелмәгән имбир тамыры; ваҡланған кейәү үләне (организмға инфекцияға ҡаршы көрәшергә ярҙам итә). Өс үләнде бергә ҡушып һалырға ла мөмкин, ләкин яртышар ҡалаҡ күләмендә генә үлсәргә кәрәк. Бөтә ҡушылмаларҙы һалып бөткәс, бер сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр бер ҡалаҡ итеп йылы көйөнсә эсергә.

● **Эҫе һөт.** Ике юлы бар: һелтеле һыу ("Боржоми" тибындағы) ҡатыштырып (1:1) йәки бер стакан һөткә 1 балғалаҡ бал һалып ҡайнатырға.

● **Инжир** емешен яҡшылап йыуып, 1,5 стакан йылы һөткә уртаса 1 емеш нисбәтендә һалып, ярты сәғәт талғын утта ябылған көйөнсә ҡайнатырға. Уттан алғас, инжир бешекләнһен өсөн кәстрүлде таҫтамал менән урап ҡуйырға. Ҡайнатманы әҙләп кенә уртлап эсергә.

● **Корица.** 1 ҡалаҡ йылытылған балға 1/4 балғалаҡ корица ҡушып, көнөнә 3-5 тапҡыр ашарға. Был оҙайлы йүтәлдән арынырға һәм тын юлдарын таҙартырға ярҙам итә.

● **Әнис** орлоҡтары ҡайнатмаһын (1 л һыуға 15-20 г әнис орлоғо) сәғәт һайын 30-50 мл эсергә. Ҡайнатма йүтәлде йомшартырға, ҡаҡырыҡты сығарырға ярҙам итә.

● **Банан.** Бешкән бананды иләк аша үткәреп, 2 бананға 1 сынаяҡ шәкәрле һыу нисбәтендә үлсәп, эҫе һыулы кәстрүлгә һалырға. Өҫтәп йылытып эсергә.

● **Һуған һәм бал.** 500 г һуғанды ваҡларға, 400 г шәкәр ҡушып, 1 литр һыу ҡойоп, талғын утта 3 сәғәт ҡайнатырға. Һыуытып, 50 г бал ҡушып быяла һауытҡа ҡойоп тултырып, нығлап ябырға. Көнөнә 4-6 ҡалаҡлап ашағандан һуң эсергә.

● **Май һәм йомортҡа һарыһы.** Көнөнә бер тапҡыр 1 балғалаҡ ошо ҡатышманы ашарға: 2 балғалаҡ яңы бешелгән аҡ май, 2 сей йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ он йәки крахмал һәм 2 балғалаҡ балды ҡушып, яҡшылап бутарға.

● **Ҡыҙыл көртмәле һуты.** Ҡаҡырыҡты йомшартыу өсөн ҡыҙыл көртмәле һутын әҙ генә шәкәрле сироп йәки бал менән бутап эсеү файҙалы. Ҡатышманы көнөнә бернисә тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә кәрәк. Был ҡатышма ярҙамында дауаланғанда ҡайнатылған һыу йәки сәй урынына ер еләгенән эшләнгән ҡайнатма эсеү файҙалы.

● **Кишер һуты менән һөт.** Яңы һығылған кишер һуты менән һөттө тигеҙ нисбәттә ҡушырға һәм көнөнә 5-6 тапҡыр 50-100 мл күләмендә йылы көйөнсә эсергә.

КИТАБЕННАС



# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX быуат башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### Хушлашыу һүҙе

Кис еткәс, башҡалар менән Бәйғәмбәрҙең һәр һүҙен ихлас тыңлаған күрәҙәсе уға рәхмәт әйткән. "Бөгөнгө көн, һин баҫып торған урын, беҙҙең менән һөйләшкән рухың изге булһын", - тигән ул.

"Һеҙҙең менән мин һөйләштемме? - тип һораған Бәйғәмбәр. - Мин дә һеҙҙең кеүек тыңлаусы түгелме ни?" Шунан ул ҡорамдың тупһаһынан төшкән. Халыҡ уның артынан эйәргән. Караптың палубаһына менгәс, Бәйғәмбәр, халыҡ төркөмөнә ҡарап, һүҙен дауам иткән:

- Елдәр миңә һеҙҙең менән хушлашырға ҡуша. Улар кеүек ашыҡмаһам да, мин һеҙҙе ҡалдырырға тейеш. Беҙ - илгиҙәрҙәр, юлдың кешеләрҙән йыраҡын һайлайбыҙ һәм көн тамамланған ерҙә яңы көндө башламайбыҙ. Беҙ көнө-төнө юлда. Беҙ - йәшәргә тырмашҡан үҫемлектең орлоғо. Ир ҡорона инеп, күңелдәребеҙ тулышҡас, ел тараҡан орлоҡ кеүек, төрлө яҡҡа таралабыҙ. Һеҙҙең арала мин оҙаҡ булманым, әйткән һүҙҙәрем унан да ҡыҫҡараҡ. Әгәр ҙә уй-хистәрем һеҙҙе ташлап китһә, һөйөүем хәтерегеҙҙән юйылһа, мин яңынан килермен. Ул саҡта яңы һүҙҙәр менән тағы ла тулыраҡ һөйләшербеҙ. Эйе, мөҙҙәте еткәс, мин тағы ҡайтырмын. Үлем мине һеҙҙән йәшергән хәлдә лә, тынып ҡалһам да, аңығыҙҙы һағынырмын. Һеҙ мине һағынғанға, мин һеҙҙе һағынырмын. Минең әйткәндәрем хаҡ булһа, ул дөрөҫләк тағы ла аңлайышлыраҡ телдә яңғырар һәм уның һүҙҙәре уйҙарығыҙ менән тап килер. Мине елдәр алып китә, ләкин мин мәңгелеккә юҡ булмайым. Һөйләгәндәремә битараф булмаһағыҙ, һөйөүемдең емештәре өлгөрһә, был көн киләһе көндәргә өмөт уятыр. Кеше хәстәре үҙгәрә, әммә һөйөү тойғоһо бөтәгеҙҙә лә бер төрлө һаҡлана, кешеләр уй-тойғоларын һәр саҡта ла һөйөү менән һуғарырға теләй. Шуға күрә лә, тынлыҡтың иң төпкөлөнән дә кире киләсәкмен. Болондарҙағы ысыҡ булып таралған томан күккә күтәрелеп, болотҡа әүерелә һәм яңынан ямғыр булып ергә яуа. Мин дә шул томан кеүекмен. Төнгө тынлыҡта урам ҡыҙырҙым, рухым һәр өйгә инеп сыҡты. Һәр берегеҙҙең йөрәк тибешен йөрәгем менән тойҙом, тын алыуығыҙҙы һулышыма ҡуштым. Эйе, мин һеҙҙең ҡайғы-шатлыҡтарығыҙҙы уртаҡлаштым. Һеҙ күргән төштәрҙе мин дә күрҙем. Тауҙар араһындағы күлдә тауҙар бейеклеге сағылған кеүек, миндә һеҙҙең уй-хәстәрегеҙ сағылды. Балаларҙың шатлыҡлы көлөүе, йәштәрҙең тиле өмөтө - барыһы ла миңә һеңде. Уйҙарығыҙҙың сикһеҙлеге өсөн яраттым мин һеҙҙе. Әммә шул сикһеҙлектә һеҙ бәләкәй генә күҙәнәк кеүекһегеҙ. Шул уҡ ваҡытта, бөйөкһөгөҙ ҙә. Һүрелмәҫ өмөтөгөҙ һеҙҙе бөйөк итә. Һеҙҙе: "Һәр берегеҙ көсһөҙ сылбырҙың йомшаҡ өлөшө", - тип ышандырырға тырышалар. Бәләкәй генә ҡаҙаныштарығыҙға ҡарап фекер йөрөтөү океан көсөн уның күбектәренә ҡарап фекер йөрөтөүгә бәрәбәр, уңышһыҙлыҡтарығыҙ өсөн ғәйепләү йыл миҙгелдәрен үҙгәреүҙә ғәйепләүгә тиң.

Эйе, һеҙ океан кеүек. Ауыр йөк тейәгән караптар күңелегеҙ ярында тулҡын көтә, ә һеҙ, океан кеүек яйһығыҙ, ул караптарҙы ҡосағығыҙға алырға ашыҡмайһығыҙ.

Эйе, һеҙ йыл миҙгелдәре кеүекһегеҙ. Ҡыш көнө яҙҙы онотҡан кеүек булһағыҙ ҙа, күңел яҙы һәр саҡ эргәгеҙҙә. Ул һеҙгә үпкәләмәй, бары татлы төш булып йылмая.

Быларҙы мин: "Ул беҙҙе юғары баһаланы", - тип әйтеүегеҙҙе теләп һөйләмәйем. Мин һеҙҙең уйығыҙҙағын бары тик һүҙҙәргә әйләндерәм. Телмәр - ул һүҙһеҙ ҙә аңлашылғанды һүҙ менән әйтергә маташыу ғына. Һеҙҙең уйҙарығыҙ һәм минең һүҙҙәр - улар хәтер һандығынан килгән тулҡын ғына. Ә ул һандыҡта кисәге көн дә бар, боронғо ла бар. Унда шулай уҡ Ер беҙҙе лә, үҙен дә белмәгән саҡтар тураһындағы иҫтәлектәр ҙә бар. Аҡыл эйәләре һеҙгә аҡыл өйрәтергә килә, ә мин һеҙҙең Аҡылдан өйрәнергә килдем һәм теләгәнемдән күберәген таптым. Заяға үткән ғүмерегеҙ тураһында ҡайғырған саҡта күңелегеҙҙәге рух саткыһы яҡтырғандан-яҡтыра бара. Тән тереклеген ҡайғыртҡандар ғына ҡәберҙән ҡурҡа. Мәңгелектә ҡәберҙәр булмай. Зыярат эргәһенән үткәндә иғтибарлыраҡ ҡарағыҙ: унда ҡулға-ҡул тотоношоп бейеп йөрөгән үҙегеҙҙе лә, балаларығыҙҙы ла күрерһегеҙ. Ысынлап, үҙегеҙ һиҙмәһәгеҙ ҙә, унда һеҙ йыш булаһығыҙ.

Һеҙгә үҙегеҙ көтмәгәндәр килгән һәм иманығыҙ урынына тауҙай байлыҡтар вәғәҙә иткән. Уларҙың һүҙенә ышанып, һеҙ үҙ байлығығыҙҙы, власығыҙҙы, данығыҙҙы биргәнһегеҙ. Мин артыҡ вәғәҙәләр бирмәнем, шулай ҙа һеҙ миңә ҡарата йомартыраҡ булдығыҙ, йәшәүгә ынтылыш бирҙегеҙ. Ә бит кеше өсөн шунан да ҙурыраҡ бүләк юҡ. Үлемһеҙлектең хыял түгеллеген аңлағас, кешенең йәшәү мәғәнәһе теләккә, кипкән ирендәре өсөн тормош Йәншишмәгә әйләнә. Был шишмә янына килгәндә уның тере һыуының мәңгелек булыуын күреү - минең өсөн иң ҙур бүләк. Уның һыуын эскән саҡта йәнем уға ҡушыла. Башҡа бүләктәрегеҙҙән баш тартҡас, күптәрегеҙ мине был йә үтә ғорур йә баҙнатһыҙ, тип уйлайҙыр. Эшем өсөн хаҡ һорамағас, мин, ысынлап та, ғорурмын. Ә Тәбиғәт биргән бүләктәрҙән баш тарта алмайым. Һеҙ табын өҫтәле артына саҡырғанда, мин эргәләге ҡалҡыулыҡта емеш-еләк менән туҡланыуҙы хуп күрҙем. Һеҙ өйөгөҙгә саҡырһағыҙ ҙа, мин ҡорам төкәтмәһендә йоҡлап йөрөнөм. Эргәгеҙҙә булмаһам да, һеҙҙең эскерһеҙ һөйөүегеҙ менән йәшәнем, төндәрем төштәргә бай булды. Һеҙ ҙә бит миңә биргәнегеҙ өсөн хаҡ һорамайһығыҙ - шуның өсөн мең рәхмәтлемен. Көҙгөгә ҡарап, үҙе менән һоҡланған изгелек ташҡа әйләнә. Үҙен маҡтаған изгелек башҡаларға ләғнәт уҡый. Кемгәлер мин үҙ яңғыҙлығынан иҫергән, ситләшкән кеше булып тойолғанмындыр. Шул саҡта һеҙ: "Ул беҙҙең менән кәңәшләшмәй, үҙ урманындағы ағастар менән һөйләшә, тауҙар башында түбәндәге ҡаланы яңғыҙы күҙәтеп ултыра", - тигәнһегеҙҙер. Эйе, шулай булды: мин тау-урмандарҙа, һеҙҙән ситтәрәк йөрөнөм. Ләкин ситтә булмаһам, тауҙарға үрмәләмәһәм, мин һеҙҙе күрер инемме ни? Ысын мәғәнәһендәге яҡынлыҡты ситкә китмәйенсә аңлап буламы ни? Бөгөн арағыҙҙа миңә өндәшмәгәндәр ҙә булды. Бына уларҙың һүҙҙәре: "Илгиҙәр, ниңә һин бөркөттәр оя ҡорған буй етмәҫ түбәләрҙә яңғыҙ йөрөйһөң? Ниңә бойомға ашмаҫты эҙләйһең? Ниңә дауылдарға хужа булырға маташаһың? Беҙгә кил һәм беҙҙең һымаҡ бул. Беҙҙең икмәктән ауыҙ ит, шарап эс, танһығыңды ҡандыр".

Быларҙы улар күңелдәренең яңғыҙ булыуы арҡаһында уйланылар. Яңғыҙлыҡтары тағы ла тәрәнерәк булһа, һеҙҙең ҡайғы-шатлыҡтарығыҙҙың серен эҙләүемде төшөнөрҙәр ине. Мин һеҙҙең күктәге "Мин"егеҙҙең иң төпкөлдәрендә һунар иттем. Әммә һунарсы артынан да ҡыуа төштөләр. Шуға күрә яндан осҡан уҡтарымдың күбеһе үҙ күкрәгемә табан осто. Осҡан килеш шыуышырға ла тура килде. Сөнки мин ҡояш аҫтында ҡанаттарымды йәйгәндә, уларҙың күләгәһе, ташбаҡа кеүек, ер буйлап шыуышты. Мин бер үк ваҡытта инандым да, шикләндем дә. Шуға күрә һеҙҙе яҡшыраҡ аңлау өсөн яраларыма тоҙҙо үҙем һиптем. Шундай ҡыйынлыҡтар аша туплаған тәжрибәм, белемем менән мин һеҙгә шуны әйтәм: һеҙ үҙ тәндәрегеҙҙең ҡоло түгел, өйҙәрегеҙгә, баҫыуҙарығыҙға һеҙҙе бер кем дә ҡуша бәйләмәгән. Һеҙҙең "Мин"егеҙ тауҙар аша елдәргә эйәреп, сәфәр ҡыла. Ул - ҡояш аҫтында йылы урын эҙләп шыуышҡан, йәки ер аҫтына ҡасып ҡотолорға тырышҡан ҡурҡаҡ йән эйәһе түгел. Юҡ, ул - ерҙе ҡосҡан, уның менән бергә хәрәкәт иткән азат зат. Был һүҙҙәр аңлашылмаһа, айышына төшөнөргә тырышмағыҙ. Һәр башланғысты томан ҡаплай, яҡтылыҡ аҙаҡ килә. Мине лә башланғыс тип иҫләүегеҙҙе теләр инем. Йәшәйеш тә томандан барлыҡҡа килгән, ә үтә күренгән кристалдан түгел. Ләкин томандың тараламы-юҡмы икәнен кристалдан башҡа кем ышаныслы әйтә ала? Мине хәтерегеҙгә төшөргән саҡта тағы бына шуны иҫләгеҙ: "Мин"егеҙҙәге иң көсһөҙ, буталсыҡ күренгән, ысынында, иң көслө һәм сағыу. Һөлдәгеҙ Илаһи һулыштан барлыҡҡа килгән түгелме? Был ҡаланы, ундағы бөтөн нәмәне хыялығыҙ барлыҡҡа килтергән түгелме? Эйе, тик уны һеҙ онотҡанһығыҙ ғына. Әгәр ҙә Илаһи һулышты тойорға һәләтле булһағыҙ, ҡалған бөтөн нәмәне онотор инегеҙ. Әгәр тәүге саф хыялығыҙҙың шыбырлауын булһа ла ишетһәгеҙ, башҡа өндәр юҡҡа сығыр ине. Ләкин һеҙ ишетеүҙең, күреүҙең нескәлектәрен юғалтҡанһығыҙ. Был насар түгел. Күҙҙәрегеҙҙәге күҙъяпманы ул япманы туҡыған ҡулдар ғына сисә ала. Ҡолаҡтарығыҙҙағы балсыҡты балсыҡты иҙгән ҡулдар ғына тишә ала.

Һеҙ күрәсәкһегеҙ.

Һеҙ ишетәсәкһегеҙ.

Әммә ҡасандыр насар күреүегеҙгә, һаңғырау булыуығыҙға үкенмәҫһегеҙ. Сөнки яҡтылыҡ килгән көндө бөтөн нәмәнең йәшерен тәғәйенләнешен беләсәкһегеҙ. Яҡтылыҡты аңларға мөмкинлек биргән өсөн ҡараңғылыҡҡа рәхмәт уҡырһығыҙ.

Онотмағыҙ, мин кире ҡайтырмын. Тиҙҙән мине икенсе ҡатын донъяға тыуҙырасаҡ...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ
әҙерләне.
(Аҙағы).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Беренсе сер

### Гипноздан сығығыҙ

Бына ни өсөн үҙегеҙҙә хәҡиҡәт асылған кеүек көслө инаныуҙа булырға ярамай. Икенсе төрлө әйткәндә, хәҡиҡәт тураһында әлеге күҙаллауҙарығыҙ ысын хәҡиҡәт икәнлеген раҫларға тейеш түгелһегеҙ. Киреһенсә, ошо мәлдән ҡеүәтегеҙҙе асырға ҡамасаулаған ялған инаныуҙар, ялған ҡиммәттәр, ялған аңлатмалар гипнозы аҫтында булыуығыҙҙы аңлап, алға барыу зарур. Беҙ, нигеҙҙә, нимә тип һеңдергәндәр һәм нимә тип уҡытҡандар, шуның һөҙөмтәһе булып торабыҙ. Күпселек ябай халыҡ сикһеҙ мөмкинлеген асыуға яҡын да килмәй, сөнки хәҡиҡәтте беләбеҙ, тигән ялған инаныу менән йәшәй. Улар ата-әсәһенә, уҡытыусыларға, дингә, китаптарға ышана һәм хатта үҙҙәренә һеңдерелгәндең хаҡлығын раҫларға тырыша.

Миллиондар уйлап та тормай "аҡыллы баштар"ҙың ялҡынлы телмәренә иҫе китеп, уларҙың артынан эйәрә, хатта ошо "эксперттарҙың" принциптары аныҡ тормошҡа тура киләме-юҡмы икәнлеген ҡарап та тормай. Беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙе хатта ошо ҡиммәттәрҙән һәм инаныуҙарҙан юғарыраҡ үҫкәс тә, уларға һуҡырҙарса йәбешеп, үҙебеҙҙе сикләйбеҙ. Бәхеткә күрә, кемдер йәки нимәлер бөгөнгө аң кимәленән сығырға ярҙам итә. Был үҙ-үҙеңдә абсолют ышаныу асылыуы һәм үҫешеүе тураһында һөйләй. Һеҙҙең тәү сираттағы бурысығыҙ булып кем булырға теләүегеҙгә ныҡ ҡамасаулаған гипноз халәтенән сығыу тора. Түбәндәге раҫлау менән танышығыҙ:

Уяныу дәрәжәһе ҡабул итергә һәләтле үҙегеҙҙәге Хәҡиҡәт күләме менән туранан-тура бәйле. Ә хәҙер был һөйләмде тағы бер тапҡыр уҡып сығығыҙ! Был тормошоғоҙҙо үҙгәртергә һәләтлелегегеҙҙе билдәләүсе фактор. Бөйөк остаздың һүҙҙәре менән әйткәндә, "Хәҡиҡәтте табығыҙ, Хәҡиҡәт һеҙҙе азат итер".

Был китапта килтерелгән күп концепциялар әлеге ваҡытта һеҙ Хәҡиҡәт тип уйлаған нәмәләр менән ҡапма-ҡаршы булыр. Ҡайһы берҙәре, хатта сәйер йәки логикаға һыймаҫтай булып күренер, инаныу системағыҙҙы ҡаҡшатыр. Һайлағыҙ: уларҙың ысын икәнлеген асыҡлайһығыҙмы, әллә уларға ҡаршы тораһығыҙмы. Был беҙҙе ҡабат алда әйтелгән фекергә кире ҡайтара: тормошоғоҙ туранан-тура үҙегеҙ ҡабул итә алған хәҡиҡәт күләменә бәйле үҙгәрәсәк. Әгәр үҙгәрештәргә һәм үҙегеҙҙә ышанысты арттырыуға ихлас көйләнеш алғанһығыҙ икән, аңығыҙҙы ла асырға тейешһегеҙ. Мин был китапта яҙылғандарҙың барыһын да шулай кәрәк, хәҡиҡәт тураһында минең һүҙҙәремә генә нигеҙләнеп ҡабул итеүегеҙҙе теләмәйем. Әгәр шулай итһәгеҙ, уҡығандарығыҙҙан файҙа бик аҙ буласаҡ. Бөтөн принциптарҙы үҙ тәжрибәгеҙҙә һынап ҡарағыҙ. Быға тиклем Хәҡиҡәт тип атаған нәмәнең үҙегеҙ өсөн хәҡиҡәт икәнен раҫлағас ҡына эске инаныу һәм ышаныу киләсәк, ул артабан үҙегеҙҙең ышанысығыҙҙы булдырасаҡ нигеҙ булып тораcаҡ. Иҫке бина урынына яңы "конструктив" бина төҙөр өсөн, башта тәүге объектты емереп, уны ер менән тигеҙләргә кәрәк. Быны һеҙ тулы ҡанлы, сағыу һәм бай тормош алып барырға ҡамасаулаған ялған факттарҙың "фундаментын" ҡаҡшатып эшләй алаһығыҙ. Был китапта һүҙ, нигеҙҙә, ошо хаҡта барасаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**



### 19 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Внимание! С 05.00 до 11.45 вещание осуществляется по кабельным и спутниковым сетям.**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". Детективный сериал. 1-2 серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Код 100" (18+).
03.00 Новости.
03.05 "Гарфилд". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

**Внимание! С 05.00 до 11.50 вещание осуществляется по кабельным и спутниковым сетям.**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Защита Полежаева". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-3". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Год в Тоскане". 1-3-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.45 "Елисеевский". Казнить. Нельзя помиловать", "Следственный эксперимент. Мыслить как убийца". Док. фильмы (12+).
02.20 "Человек-приманка". Сериал (12+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**

**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бай" (12+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Биш дауа" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (0+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "Мартовские иды". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Долгое-долгое детство" (12+).**

### 20 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Паук". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "С девяти до пяти". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.45 "Вегас". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Смерть для служебного пользования". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Год в Тоскане". 4-я и 5-я серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
00.35 "Русский ум и тайны мироздания", "За гранью. Синтетическая жизнь" (12+).
02.05 "Человек-приманка". Сериал (12+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Биш дауа" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Золотой теленок". Худ. фильм (0+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Вечерняя трапеза" (12+).**

### 21 ОКТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Паук". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика".
01.30, 03.05 "Мой кусок пирога". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.40 "Вегас". Сериал (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Миллионер в трущобах". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Год в Тоскане". 6-я и 7-я серии (12+).
22.55 "Никита Михалков". Фильм Саиды Медведевой к 70-летию режиссера (12+).
00.15 "Родня". Драма (12+).
02.15 "Человек-приманка". Сериал (12+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (6+).**
**23.00 "Королева". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Два берега бытия" (12+).**

### 22 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Паук". Сериал (18+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 7-я и 8-я, заключительная, серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Пространство жизни Бориса Эйфмана" (12+).
01.30, 03.05 "Пустоголовые" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "Вегас" (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Треугольник ненависти" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Год в Тоскане". 8-я и 9-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Сердечные тайны. Евгений Чазов" (12+).
02.30 "Человек-приманка". Сериал (12+).
03.30 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Это мы!" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.55 Футбол. Молодежное первенство РФПЛ. ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Крылья Советов" (Самара).**
**15.00 "Хазина" (6+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Историческая среда" (6+).**
**18.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига) (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Император".**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Страна Айгуль" (12+).**

### 23 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Паук". Детек. сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.35 "Фарго". Детективный сериал (16+).
01.40 "Перед зимой" (16+).
03.35 "Вегас" (16+).
04.25 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Товар - деньги - товар". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Год в Тоскане". 10-я и 12-я серии (12+).
23.50 "Территория любви". Творческий вечер Никиты Михалкова и Эдуарда Артемьева.
02.20 "Человек-приманка" (12+).
03.20 "Горячая десятка" (12+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15, 19.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "ФинЛикБез" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (0+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**23.00 "Большие надежды" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "В ночь лунного затмения" (12+).**

### 24 ОКТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30 "Наедине со всеми". Худ. фильм (6+).
06.00 Новости.
06.10 "Наедине со всеми". Худ. фильм (16+).
06.30 "Я шагаю по Москве".
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Никита Михалков. Чужой среди своих" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Жестокий романс".
15.00 "Голос" (12+).
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.00 "Вместе с дельфинами".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.15 "Неоконченная пьеса для механического пианино" (16+).
02.10 "Безумное свидание" (16+).
03.55 "Модный приговор".
04.55 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Нежданно-негаданно" (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+)
08.20 "Мульт-утро".
09.30 "Правила движения" (12+).
10.15 "Это моя мама" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Владимир Крючков. Последний председатель" (16+).
12.20 "Я тебя никому не отдам" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Я тебя никому не отдам". Продолжение сериала (12+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Год в Тоскане". 13-16-я, заключительная, серии (12+).
00.40 "Куда уходит любовь". Мелодрама (12+).
02.45 "Вылет задерживается".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Тайна Келлс" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Йокерит" (Хельсинки).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Второй шанс" (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Похищение девушки" (12+).**

### 25 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35 "Как украсть миллион".
06.00 Новости.
06.10 "Как украсть миллион".
08.10 "Армейский магазин".
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Вместе с дельфинами".
14.10 "Муслим Магомаев. От первого лица" (12+).
15.15 "Есть такая буква!" (16+).
16.20 "Время покажет" (16+).
17.55 "Точь-в-точь". Шоу пародий
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод. Сеанс второй". Криминальный сериал (18+).
01.00 "Сайрус" (16+).
02.45 "Каблуки" (12+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.30 "Слово для защиты". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.10 "Свадьба" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Свадьба". Продолжение (16+).
15.30 "Евгений Петросян. "Улыбка длиною в жизнь". К 70-летию артиста. Фильм 3-й (16+).
17.45 "В тесноте, да не в обиде". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Солнечный удар". Драма (12+).
03.55 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 Мультфильмы (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Убежавшие в счастье" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**17.30 "Вы не оставите меня" (16+).**
**19.30 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.45 "История признания" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Интервью" (12+).**
**21.00 "Это мы!" (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2015" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Страсти Христовы". Худ. фильм (16+).**
**02.30 "Свидание с джазом" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТӘҮГЕ ОПЕРАЛАРҘЫ УЛАР ЯҘҘЫ

## (Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуыуына - 120 йыл)




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ҡорбаш. Декларация. Әләм. Амурҙар. Мәржәни. Апартеид. Маил. Мөстәҡил. Ҡоролтай. Инвалюта. **Рафиҡов**. **Исҡужин**. Лото. **Шәкүров**. Ельмаре. Лао. Васи. Етәүләп. Бикбаев. Виннипег. Такт. Ирек. Крузо. Милек. Вебб. Ашына. Нуль. Преамбула. Хоҡуҡ. Гимн.

**Вертикаль буйынса:** Әмер. Суверенитет. Фелонь. Ким. Ритти. Мәүлит. Осор. Диуан. Республика. Милли. Шапито. **Ҡолшәрипов**. Бүкән. Аралыҡ. Ахмал. Брадәр. Ватан. Берг. Алҡа. Вәкил. Ялмап. Иншаков. Атан. Аҡын. Күмәс. Талау. **Иҙрисов**. Журнал. Аниме. Дойен. Вето. Герб.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 октябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма
**18 октябрь "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма
**19 октябрь** Сибай концерт-театр берләшмәһе "Ҡунаҡ ҡыҙы Ынйы йәки операция "Б" (Э. Ибраһимова), музыкаль комедия
**20 октябрь** Туфан Миңнуллиндың хәтер кисәһе
**21 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим)
**22 октябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл
**23 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00
**20 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 10.00, 12.00
**20 октябрь "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия
**23 октябрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 октябрь "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия
**22 октябрь "Чума XXI века@zhizni.NET"** (В. Сигарев), драма
**23 октябрь "Тиле йәшлек"** (И. Абдуллин), комедия

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

**14 октябрҙә мөхәррәм айы башында һижри буйынса 1437 йыл башланды.**

Мөхәррәм - Ислам донъяһында хөрмәт ҡаҙанған дүрт айҙың береһе. 23 октябрҙә буласаҡ Ғәшүрә көнө - мөхәррәмдең иң ҡәҙерле кисе. Күктәрҙе, күк көмбәҙен, ерҙе, тауҙарҙы, диңгеҙҙәрҙе, йондоҙҙарҙы, фәрештәләрҙе һәм Әҙәм ғәләйһис-сәләмде Алла Ғәшүрә көнөндә яралтҡан. Ошо көндә Ибраһим ғәләйһис-сәләм тыуа һәм Ғәшүрә көнөндә Нәмруд утынан ҡотолоп ҡала. Аллаһ хаҡына тип ҡорбанға салыу өсөн үҙ улын тауҙар түбәгенә алып сыҡҡан Ибраһимға ҡуй һарығын да Ул Ғәшүрә көнөндә тапшыра. Был көндә Фирғәүен һыуға батып үлә, Ғайса ғәләйһис-сәләм күккә аша, Әййүб хәҙрәт ауырыуҙарҙан дауа таба, Әҙәм ғәләйһис-сәләмдең тәүбәләре ҡабул була, Нух ғәләйһис-сәләм туфан һыуынан ҡотола, Юныс ғәләйһис-сәләм балыҡ эсенән сыға, Яҡуб бәйғәмбәр юғалған улы Йософ менән осраша.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (6) дүшәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 16:37 | 18:07 | 19:37 |
| 20 (7) шишәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 16:35 | 18:05 | 19:35 |
| 21 (8) шаршамбы | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 16:32 | 18:02 | 19:32 |
| 22 (9) кесе йома | 6:29 | 7:59 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |
| 23 (10) йома | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 24 (11) шәмбе | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 25 (12) йәкшәмбе | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮҘӘР, ЕҢЕҮҘӘР!

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһының был айҙағы уңыштары көйәрмәндәргә матур тәьҫораттар бүләк итә.**

Өфө командаһы Братиславаның "Слован" командаһы менән ике осрашыуҙа ла еңеүгә өлгәште. Ситтәге уйын, юлаевсылар файҙаһына, овертаймда 3:4 иҫәбе менән тамамланһа, "Өфө-Арена"лағы алышта ла Игорь Захаркин командаһы ҡунаҡтарҙы 3:2 иҫәбенә еңде.

Ә Хорватияның иң көслө командаһы иҫәпләнгән "Медвешчак" менән беренсе осрашыу 3:2 иҫәбенә Өфө уйынсылары файҙаһына тамамланһа, икенсе осрашыуҙа Загреб хоккейсылары оҫтараҡ булып сыҡты. Уйын иҫәбе ҡунаҡтар файҙаһына - 2:5.

Артабан юлаевсыларҙың Хельсинкиның "Йокерит" командаһын 5:1, ә Риганың "Динамо"һын 5:3 иҫәбе менән еңеүе "Салауат Юлаев"ҡа дөйөм таблицала 15-се, ә "Көнсығыш" конференцияһында 8-се урынға күтәрелергә булышлыҡ итте. Алдағы уйындарҙа ла яраҡкан командабыҙға тик уңыштар юлдаш булһын!

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ЙӘШТӘР ТЕАТРЫ...

## киләсәк быуын өсөн эшләргә тейеш

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры үҙенең егерме алтынсы театр миҙгелен асты. Башҡорт труппаһы тамашасыларға Сыңғыҙ Айтматовтың әҫәре буйынса ҡуйылған ғаилә ҡиммәттәре, быуындар бәйләнеше, ғөмүмән, тормош асылы хаҡында уйландырырлыҡ "Дингеҙ ярын иңләй ала эт" нәҫерен тәҡдим итте. Миҙгел асылыу менән театрҙа эшләгән барыһы өсөн дә ҡатмарлы ла, ҡыҙыҡлы ла тормош башлана. Ошо хаҡта беҙ Милли йәштәр театрының директоры, үҙен Рәсәй кимәлендә танытҡан һәләтле режиссер, ә элгәре - яратҡан артисыбыҙ һәм йырсыбыҙ булған Азат Нәҙир улы ЙЫҺАНШИН менән әңгәмәләштек.**



**Азат Нәҙир улы, һеҙ Милли йәштәр театры директоры вазифаһын былтыр йыл уртаһында биләнегеҙ. Быйылғы миҙгел иһә тулыһынса һеҙҙең ижади сәйәсәткә буйһонасаҡ булһа бит инде...**

- Милли йәштәр театры - ул минең ижади ҡанаттарымды үҫтергән театр. Мин бында өс йыл ғына эшләп китһәм дә, театр актеры булып танылыу яуланым, театр актерҙары Рәсүл Ҡарабулатов һәм Рушана Бабич менән бер рәттән, Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" трагедияһындағы башҡарған төп ролдәр өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булдым. Шуға ла яңынан ошо театрға директор булып ҡайтыу үҙем өсөн бик ҡыуаныслы ла, яуаплы ла ваҡиға булды. Ҡыуаныслы, сөнки хәҙер инде минең күп театрҙарҙа эшләгәндән һуң, театр ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға үҙемдең яуаптарым бар. Һәм ошо йылдар буйы йыйылған тәжрибәмде, уйҙарымды тормошҡа ашырыу мөмкинлеге тыуғанға ла был ҡыуанысым. Ә яуаплы, сөнки замандар ниндәй генә ауыр булмаһын, театр һәр саҡ тамашасыға өмөт, яҡтылыҡ, сәнғәт бөйөклөгө аша тормош ҡиммәттәрен еткерергә бурыслы һәм был бурысты үтәү ябайҙарҙан түгел...

**Әлеге ваҡытта башҡорт труппаһы Мөҙәрис Багаевтың "Аҡса булһа бер муҡса" исемле музыкаль комедияһының премьераһына әҙерләнә. Һеҙ уның режиссеры. Иң тәүге һорауым драматург тураһында. Ишетеүемсә, был пьесаны һеҙ уҡып сығыу менән, "Үҙем сәхнәләштерәм", тигән фекергә килгәнһегеҙ...**

- Мөҙәрис Багаев менән мин Салауат театрынан бирле таныш. Уның "Мөхәббәт күле" пьесаһын сәхнәгә сығарғайныҡ. Бик үҙенсәлекле драматург, теле лә, бар персонаждары ла, юморы ла шул тиклем халыҡсан... Шәхес булараҡ та оҡшай миңә Мөҙәрис ағай. Йор һүҙле, тәрән фекерле, саф һәм ихлас күңелле... "Аҡса булһа бер муҡса" пьесаһы Мирхәйҙәр Фәйзиҙәр заманында яҙылған кеүек, әммә уны бөгөнгө автор яҙғаны хайран ҡалдырҙы.

**Был комедия ваҡиғалары егермense быуат башында Миңзәлә ҡалаһында йәшәүсе башҡорт сауҙагәрҙәре ғаиләһендә бара. Тарихи ерлектәге музыкаль комедия ниндәй быуын тамашасыһына йүнәлтелгән?**

- Мин милли театр асылы хаҡында күп уйланам. Һәм мине бер тарихи факт ныҡ аптырашҡа һала. Башҡорт һәм татар халыҡтары шул тиклем йыр-бейеүгә әүәҫ, шул тиклем моңға тартылыусан, әммә милли театр ни өсөндөр драматик юлды ғына һайлаған һәм бихисап театрҙар араһында бер генә музыкаль театр ҙа юҡ. Ә бит тамашасы араһында музыкаль комедиялар ҙур популярлыҡ яуланы. "Башмағым", "Ҡоҙаса"... Шуға ла мин "Аҡса булһа бер муҡса" музыкаль комедияһының тамашасы даирәһе киң булыр, тип уйлайым, сөнки ул бар ғаилә менән килеп ҡарай торған сағыу бер тамаша буласаҡ. Йәштәргә лә ҡыҙыҡ булыр, моғайын, сөнки төп тема - мөхәббәт һәм дә төп ролдәрҙе йәш актерҙар башҡара. Йырҙарҙы композитор Ришат Сәғитов ижад итә, бейеүҙәрҙе хореограф Сулпан Аҫҡарова һала. Нимәһе ҡыҙыҡ: әгәр ҙә тамашасы башҡорт труппаһының байтаҡ артистарын эстрада йырсылары ла итеп белһә, был юлы бер быға са йырламаған артистарыбыҙҙы ла йырлатмаҡсыбыҙ...

**Азат Нәҙир улы, Милли йәштәр театрының төп йүнәлеше ниндәй булырға тейеш, тип күҙаллайһығыҙ?**

- Әлеге ваҡытта беҙ Мәғариф министрлығы, Өфө ҡалаһының мәғариф идаралығы менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә хыялланабыҙ. Сөнки Милли йәштәр театры күбеһенсә мәктәп уҡыусылары өсөн тамаша ҡуя. Тимәк, киләсәк быуынды тәрбиәләү эшендә беҙ бергәләп эшләргә бурыслыбыҙ, тип уйлайым. Хрестоматик геройҙар "терелеп", бала күңелен үҙенә ылыҡтырһа, аҙыусылар һалырға тырышҡан ҡиммәттәр хаҡында һөйләп, әҙәбиәткә, ә әҙәбиәт аша - сәнғәткә һөйөүҙе тәрбиәләһә - тимәк, беҙ бергәләп йәмғиәтебеҙгә аҡыллы, уйлы, тәрән фекерле шәхес үҫтерәбеҙ. Беҙҙең театр тамашасыһын беренсе кластан алып ун беренсе класҡа тиклем ҡурсаларға тейеш, ул мәктәптә үткән китаптарының геройҙары менән театр сәхнәһендә лә мотлаҡ осрашырға тейеш. Быйылдан бергәләп эшләй башлаһаҡ, был педагогтар, атай-әсәйҙәр һәм, әлбиттә, уҡыусылар өсөн бик яҡшы булыр ине, тип уйлайым.

**Әминә ГӘРӘЕВА**
**әңгәмәләште.**

ЯҢЫ КИТАП

# "ҒҮМЕР КИСЕҮҘӘРЕ"

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Тамара Ғәниеваның яңы шиғри йыйынтығы донъя күрҙе. "Ғүмер кисеүҙәре" китабына шағирәнең һуңғы йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәре тупланған. Йыйынтыкта шағирә яҡты кисерештәр һәм тойғолар, һағыш-һыҙланыуҙар, юғалтыу-табыштар, рухиәт, баҡыйлыҡ менән фанилыҡ хаҡында уйланыуҙар, ... менән фәлсәфәле лә төшөнсәләргә мөрәжәғәт итә. Ил, тел, ер, халыҡ яҙмышы - шағирәнең уй-хистәре ана шундай даирәләрҙә айҡай.




Тамара Ғәниева - "Осрашырбыҙ әле", "Күсмә ҡоштар", "Көмөш ямғырҙар", "Уйлы сағым", "Кондоҙ ҡойроғо", "Кыпсаҡтар", "Арҡайым", "Аҡыҡ көмбәҙ", "Мөхәббәткә ышанам" һәм башҡа йыйынтыҡтар авторы.

Шағирәнең яңы китабын "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында һатып алырға мөмкин. Адресы: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУЛЫҢ МЕНӘН БИР,

## аяғың менән эҙлә

Үҙенә үҙе хужа булмаған бөтәһенә лә хужа булырға тырыша.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хөкүмәт - бәләкәй сабый кеүек: бер яғында - ныҡлы аппетит, икенсеһендә - сикһеҙ яуапһыҙлылыҡ.

**(Рональд Рейган).**

Мөхәббәт ирҙе - һуҡыр, ҡатынды оҫҡор күҙле итә.

**(Эрих Мария Ремарк).**

Бик аҙҙар ғына бөгөнгө көн менән йәшәй, күптәребеҙ аҙаҡтан йәшәргә әҙерләнә.

**(Джонатан Свифт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр" , - тигән.**

**Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" - тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миңә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңдә бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр".**

**Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" - тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә нәфрәтләнәләр. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың..."**

**Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти:"Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдә саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңдә лә күреренең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп, ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4746